*✓ Һәр көнөң - бәләкәй генә ғүмер: һәр иртән йоҡонан уяныуың - бәләкәй тыуыуың, һәр иртәң - бәләкәй йәшлегең, һәр кисең һәм йоҡларға ятыуың - бәләкәй генә үлемең.*

*(А. Шопенгауэр).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№3 (525)


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Самауыр Тулаһыҡымы...

әллә Ҡытайҙыҡымы?



6

Башҡаларҙы яндырыу өсөн...

үҙенә янырға кәрәк



7

Башҡорт википедияһы

Унын эстәлеген кемдәр тулыландыра?

ВикипедиЯ
Ирекле энциклопедия

8-9

Бәйғәмбәр тормошон өйрән -

һорауҙарыңа яуапты шунан табырһың



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Үҙ көнөңдө үҙең күреү, үҙ йүнеңде үҙең йүнләү заманы, тип йыш ҡабатлайбыҙ. Ә һеҙ нисегерәк атҡараһығыҙ ошо әмәлде?

**Ринат ЙӘМИЛЕВ, Өфө ҡалаһы:** Бөгөн, ысынлап та, ошо хаҡта, йәғни бары тик үҙенә генә ышанып була торған заманда, ғаиләң, яҡындарың өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөңә ала торған ваҡытта йәшәйбеҙ, тигән фекерҙе йыш ишетергә тура килә. Ошо юҫыҡта айырыуса Советтар Союзы заманын һәм бөгөнгө Рәсәйҙе сағыштырырға яраталар. Ул һөйләшеүҙәрҙе тыңлаһаң, элегерәк тормош көтөү өсөн кеше ҡыл да ҡыбырлатмаған, ә барыһы ла үҙенән-үҙе килеп торған кеүек тойола башлай. Совет ваҡытында халыҡ өсөн уйланылған, унын өсөн эшләнелгән, уларҙы кемдер ҡайғыртҡан, ә кеше бары тик донъя хозурлығына кинәнеп кенә ятҡандай күҙ алдына баҫа. Ләкин мин был фекер менән төптө килешмәйем, сөнки тәҙрә аръяғында ниндәй замана, ваҡыт, дәүләт төҙөлөшө булыуға ҡарамаҫтан, кешегә барыбер эшләргә, үҙенең бөгөнгөһөн ҡайғыртырға һәм киләсәген уйларға кәрәк булған һәм кәрәк буласаҡ. Шулай булғас, һәр замандың да һәр кеше үҙ иңендә күтәрә торған үҙ йөгө, үҙ йүне бар. Айырма бары тик уларҙың нисек тормошҡа ашырылыуында.

Һәр быуын үҙ заманына яраҡлаша. Мин дә шулар рәтендә. Мин дә тормошҡа яраҡлашам. Быны тәү ҡарашҡа ябай ғына тойолған донъяуи мәсьәләләрҙә лә асыҡ күрергә мөмкин. Мәҫәлән, ҡарабойҙай ярмаһы ҡыйбатланһа, ғаиләбеҙ менән дөгө ашауға күсәбеҙ, иткә хаҡ артһа, уны тауыҡҡа алыштырабыҙ, фатир һатып алыу мөмкинлеге булмағас, ауырлыҡтарға ҡарамайынса, шәхси йорт күтәреп маташам. Бына шулай. Ләкин бәхет матди байлыҡҡа ғына ҡайтып ҡалмай. Донъяның матди байлығын үҙең менән ҡәбергә алып китеп булмай, шуға күрә әлеге мәлдә булғанына шөкөр ҡылып, ҡабаланмай, ҡомһоҙланмай ғына йәшәйем. Шул уҡ ваҡытта һәр аңлы кеше кеүек, мин дә һәр ваҡыт тормошомдо яҡшыртырға, ғаиләмә ҙур мөмкинлектәр тыуҙырырға тырышам, бының өсөн белемемде камиллаштырам, йәйлап булһа ла хеҙмәт баҫҡысы буйлап үрләйем, өҫтәмә килем килтерерҙәй юлдар эҙләйем. Эйе, мин, бәлки, бер ҡасан да миллиардер Дональд Трамп кимәленә етә алмаҫмын һәм был миңә, дөрөҫөн әйткәндә, кәрәкмәй ҙә, ләкин үҙемдең ғаиләмде яҡын киләсәктә матур өйҙә йәшәтеү, һәйбәт машинала йөрөтөү, матди яҡтан тотороҡло һәм бойондороҡһоҙ итеү өсөн барыһын да эшләйәсәкмен. Ә алдында маҡсаты булған һәм уға илтеүсе юлды аныҡ күҙ алдына килтергән кешенең барыһы ла уң булыуын иҫбатлап торорға кәрәкмәйҙер, тип уйлайым.

Бөгөнгө көндә күптәр "үҙ йүнеңде үҙең күреү" принцибына таянып, донъяны упҡынға тәгәрәүҙән һаҡлап тороусы ғәҙеллек, инсафлыҡ, намыҫ, бер-береңә ярҙам итеү кеүек сифаттарҙы инҡар итә. Бына шуныһы ҡыҙғаныс.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# КОНКУРСТАРҘА ЕҢӘ-ЕҢӘ...

**Йыл аҙағында БДУ-ның Сибай институты студенттары Кемерово өлкәһенең Новокузнецк ҡалаһында үткән В. Сластенин исемендәге педагогика олимпиадаһында уңышлы сығыш яһап, еңеүҙәр яулап ҡайтты.**



Рәсәйҙең төрлө төбәктәре һәм Ҡаҙағстан юғары уҡыу йорттары студенттары ҡатнашҡан олимпиадала бөтәһе 25 команда көс һынашҡан. Сибай студенттары командаһы капитаны **Зәлиә Йәноҙаҡова** һөйләүенсә, ул Ж.-Ж. Руссо эшмәкәрлеге тураһындағы һорауға аңлайышлы ла, төплө лә яңғыраған яуаптары менән капитандар араһында тәүге урын яулаған, был уңышы маҡтау ҡағыҙы һәм ҡиммәтле бүләк менән билдәләнгән. Команданың икенсе ағзаһы **Эльвира Исмәғилева:** "Алға барыусы, юғары маҡсаттар менән йәшәүсе студент, яңы һынауҙар ваҡытында яңғыҙ ҡалһа, сыныға ғына", - тигән фекер яңғыратты һәм, әйтелгәндәргә өҫтәп, күп кенә командаларҙың был сараға хатта көйәрмәндәр менән килеп төшөүөн телгә алды. "Командалар бик көслө күренә ине, баһалама комиссияһы хатта албырғап ҡалғандай тойолдо", - тип, сәйәхәт тәҫораттары менән уртаҡлашты өсөнсө ҡатнашыусы **Гүзәл Теләүсина** ла.

Студент ҡыҙҙарҙы олимпиадаға әҙерләп алып барған уҡытыусы **Фәриҙә Ғүмәрова** ла студенттарынан ҡәнәғәт булыуын йәшермәне: "Конкурстар педагогика буйынса ныҡлы белем, эрудиция, педагогик оҫталыҡ, ижади фекерләү талап итте һәм ҡатмарлы ғына булды. Бүтән командалар етәкселәре беҙҙең ҡыҙҙарҙың матур ҙа, итәғәтле лә, кәрәк саҡта үҙҙәрен ҡыйыу ҙа тота белеүенә һоҡланды. Жюри ағзалары ла башҡорт ҡыҙҙарының интеллектуаль конкурстарҙа юғалып ҡалмауын, киң ҡарашлы, ижади булыуҙарын билдәләне...

БДУ-ның Сибай институты студенттары Рәсәй кимәлендәге ошондай бәйгеләргә, олимпиадаларға йөрөп тора, еңеүҙәр яулай тора. Шуға ла студенттар ҙа, уҡытыусылар коллективы ла ошондай мөмкинлек тыуҙырған етәксегә - институт директоры, иҡтисад фәндәре докторы, профессор **Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовҡа** сикһеҙ рәхмәтле. Ә бит бөгөн йәш кешегә оло фән офоҡтарына юл алыу, еңеүҙәр үрен яулау өсөн ошондай остаздар кәрәк тә инде.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Үҙ көнөңдө үҙең күреү, үҙ йүнеңде үҙең йүнләү заманы, тип йыш ҡабатлайбыҙ. Ә һеҙ нисегерәк атҡараһығыҙ ошо ғәмәлде?

(Башы 1-се биттә).

***Әнүәр СӘЙФУЛЛИН, Әбйәлил районы:*** Ғаиләбеҙҙә өс бала үҫеп килә. Шулай уҡ әсәйемде һәм ҡәйнәмде ҡарайбыҙ. Ҡатыным хужабикә, ә мин ауыл мәктәбендә ҡарауылсы булып эшләйем. Ай һайын минең эш хаҡы, ике пенсия һәм балалар өсөн түләнгән пособие менән бергә, ауыл күҙлегенән ҡарағанда, арыу ғына ҡулаҡса килеп тора. Шулай уҡ шәхси хужалыҡта мал аҫрайбыҙ, ҡош-ҡорт көтәбеҙ, баҡса тултырып йәшелсә-емеш үҫтерәбеҙ һәм үҙебеҙҙән артканын һатыуға сығарып, килем алабыҙ. Тағы ла әсәйем, ҡәйнәм һәм ҡатынымдың алтын, оҫта ҡулдары ла килем килтерә. Улар бәйләгән шәл, кофта һәм башҡа әйберҙәргә һорау күп, шуға күрә улар ҙа буш ултырмай. Заказдар көмеп торған осраҡта кәләш Магнит баҙарына ит-һөт һатырға барғанында бер юлы бәйләмдәрен дә һатып йәки башҡа төр аҙыҡ-түлеккә алмаштырып ҡайта. Ҡала халҡы ҡул эшенең "эксклюзив тауар" икәнен белеп алды хәҙер, көтөп кенә йөрөй. Үҙем дә оло улым менән бергә ағастан кәштә, өҫтәл, ултырғыс һәм башҡа йорт өсөн кәрәкле әйберҙәр эшләп һатҡылайбыҙ. Әлбиттә, был йәһәттән ғаиләбеҙҙәге ҡатын-ҡыҙҙарға әйәреп булмай, шулай ҙа ғаилә бюджетын тулыландырыуға әҙме-күпме үҙ өлөшөбөҙҙө индерәбеҙ. Бына шулай. Аҡыл менән эш иткәндә, аҡсаны дөрөҫ ҡуллана белгәндә, донъя көтөү өсөн етә. Артыҡ байлыҡ артынан ҡыумай, зарланмай-һыҡтанмай, дәүләтте әрләмәй, барыһынан ҡәнәғәт булып көн итеп ятабыҙ.

Әле бына алда әйтелгәндәрҙән сығып һүҙ йөрөткәндә, һорауға түбәндәгесә яуап бирергә була. Беренсенән, йыл буйына тиерлек иртәнән кискә тиклем, ал-ял белмәй, шәхси хужалыҡта бил бөгөүебеҙҙе, гүзәл заттарыбыҙҙың күҙ нурын бөтөрөп бәйләм бәйләүен иҫәпкә алғанда, ысынлап та, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрәбеҙ, тип әйтергә була. Ләкин шул уҡ ваҡытта дәүләт тарафынан түләнгән пенсия, пособие, икенсе һәм унан һуңғы балалар өсөн бирелгән әсәлек капиталын, әҙ булһа ла эш хаҡымды ла иҫәпкә алмайынса булмай, сөнки улар ай һайын даими һәм ышанысл ы килеп торған тере аҡса. Ә ҡулда тере аҡса булмаһа, ит-һөттәрең менән әллә ни ыратып булмай, сөнки был өлкәлә бер уңаһын, икенсе тапҡыр туңаһын, тигәндәй.

Уйлап ҡараһаң, хәҙер хатта эшһеҙҙәргә лә аҡса түләйҙәр. СССР заманында әрамтамаҡлыҡ өсөн төрмәгә ултыртҡандар, ә хәҙер дәүләт уларҙы ҡарай. Әлбиттә, барыһын да бер күҙлектән ҡарарға ярамай, ләкин әҙмәүерҙәй, һау ир-егеттәрҙең дәүләттән аҡса көтөп өйҙә ятыуы башҡа һыймай. Бына уларҙы "үҙ йүндәрен үҙҙәре күрә" тип әйтеп буламы? Юҡ, әлбиттә. Ә йыл һайын тиерлек бала табып, уларҙы йә өләсәй-олатаһына тапшырып, йә үҙҙәре йүнләп ҡарамай, балалар пособиеһына йәшәп ятҡан ҡатындарҙы ла "үҙ көндәрен үҙҙәре күрә" тип әйтергә тел әйләнмәй. Ә шул уҡ ваҡытта дәүләттән бер тин алмай, тик үҙҙәренең көсөнә генә ышанып, үҙ йүнен йүнләп йәшәүселәр ҙә юҡ түгел. Шулар тота донъяны.

***Гөлфинә КАМАЛЕТДИНОВА, Мәләүез ҡалаһы:*** Беҙҙең ғаиләлә үҙ көнөндә үҙең күреү гәмәлен ирем атҡара. Әлеге ваҡытта мин 3 айлыҡ бәпес менән өйҙә ултырам, ә ирем беҙ бер ниндәй мохтажлыҡ кисермәһен өсөн ике урында эшләй. Әлбиттә, ул да күберәк беҙҙең менән бергә булһа, һәйбәт инде, ләкин бер-беребеҙгә ҡарап, ас ултырып булмай, донъя көтөргә, баланы үҫтерергә кәрәк. Шуға күрә түҙемлек күрһәтеп, бер-беребеҙҙе аңлап, ярҙам итешеп йәшәйбеҙ. Шулай уҡ үҙебеҙҙең шәхси йортобоҙҙа йәшәүебеҙ хәлебеҙҙе бермә-бер еңеләйтә. Йәйҙәрен баҡсабыҙҙа йәшелсә-емеш, бәрәңге үҫтереп, урман байлығын ҡулланып, ҡышҡылыҡҡа етерлек аҙыҡ-түлек әҙерләйбеҙ. Ит-һөт йәһәтенән атай-әсәйҙәрҙең ярҙамы ҙур. Шуға күрә ашау-эсеүгә аҡса әҙ китһә лә, кейемгә, балаға кәрәк-яраҡ алыу өсөн ҡулда аҡсаның һәр ваҡыт булыуы мотлаҡ.

Күп йәштәштәребеҙҙең аҡсаһы төрлө күңел асыуға сарыф ителә. Кино булһынмы, дискотекамы, класташтар, курсташтар, иптәштәр осрашыуымы - бергә йыйылырға сәбәп табып ҡына торалар. Шулай уҡ хәҙер кеше, аҡсаһы бармы-юҡмы, үҙенең дә, балаларының да тыуған көндәрен ҡунаҡ йыйып үткәрергә әүәҫләнеп китте. Бында эш бары тик ололарҙың үҙҙәренең күңел асҡыһы килеүҙә генә. Үҙ мөмкинлегеңде барлап, бурысҡа батмай ғына күңелле ял ваҡыттары ойоштороуға әлегә өйрәнеп бөтә алмай ҡуптәр. Әлбиттә, иптәштәр менән осрашыу ҙа, ғаилә байрамдары ла кәрәк, ләкин һәр нәмәлә сама белеү мотлаҡ.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

БАШ ЙОРТТА...

# ЙӨҘӨНДӘ ҠОТ БУЛҺЫН...

**Өфө йылдан-йыл үҫешә бара. Тик ул үҙгәргән, матурланған һайын, уның милли йөҙө юғалып ҡуймаһын, тип хәүефләнәм. Әллә ниндәй заманса төҙөлөш материалдары ҡулланып, шау быяланан ғына торған биналар, бәлки, ҡаланы күркәмләндерә лә, уны заманса итеп күрһәтәләр ҙә, тик баш ҡалабыҙҙың ҡото китә барған кеүек.**

Ҡаланың үҙәгендә әле эштәр ул тиклем насар түгел. Ленин урамы башланған ерҙә, шулай уҡ Салауат Юлаев майҙанында башҡорт ашһыуы, көнкүреш әйберҙәре, кейемдәре, сувенирҙар һатыу өсөн ҡулайлаштырылған тирмәләр ҙә, театрҙарыбыҙҙың күркәм биналары ла Башҡортостандың баш ҡалаһы урамынан китеп барыуыбыҙҙы хәтергә төшөрөп тора. Тик үҙәктән саҡ ҡына ситкә сыҡтыңмы, бындай тойғо ла юғала. Былтыр ҡала урамдарындағы реклама баннерҙарына бөйөк шәхестәребеҙҙең шиғырҙарын, уларҙың фотоһүрәттәрен ҡуйыу яҡшы күренеш булғайны, хәҙер уларҙың урынын төрлө сауҙа үҙәктәренең, банктарҙың рекламалары баҫып алып бөттө. Магазиндарҙың атамалары хәҙер башҡортса ла, русса ла түгел, йә инглиз йә башҡа сит телдә. Эсенә инеп ҡарамайынса, унда нимә һатылыуын да төҫмөрләүе ауыр.

Был рубрикала йәмәғәт транспорты тураһында телгә алыусылар байтаҡ булды. Кем дә кем тукталыштарҙа өсәр сәғәт автобуска ултырып китә алмайынса торғаны бар, улар белә - ни өсөндөр "Башавтотранс" автобустары бар йүнәлештәргә лә йөрөмәй. Ҡайһы бер маршруттар бөтөнләй шәхси автобустар хужаларына ғына ҡалдырылған. Улар буйлап та дәүләт автобусы ебәрелһә, халыҡҡа ла, дәүләттең үҙенә лә файҙа булыр ине.

**Гөлсара ИСЛАМОВА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**"Киске Өфө"гә яҙылырға өлгөрмәнем, тип үкенеүселәр юҡмы арағыҙҙа? Улар 17 февралгә тиклем яҙылһа, гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлаясаҡ икәнен иҫкәртегеҙ, зинһар. 500665 индекслы "Киске Өфө"гә дүрт айға 240 һум 16 тингә яҙылып була.**

**Иҫкәртеү.** Почталарҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт:
**www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең электрон почта:
**info@kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог:
**blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Көйөргәҙе районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓РФ Мәҙәниәт министрлығы мәҙәниәт өлкәһендә 2013 йылғы Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте премияларына дәғүә итеүгә конкурс иғлан итте. Был хаҡта БР Мәҙәниәт министрлығы сайтында хәбәр ителә. Документтар әҙерләү һәм тапшырыу тәртибе Рәсәй Мәҙәниәт министрлығы сайтында урынлаштырылған. Премиялар йыл һайын киң йәмәғәтселектә танылыу яулаған, Рәсәй Федерацияһының мәҙәни мираҫына тос өлөш индергән һәләтле, үҙенсәлекле әҫәрҙәр, шулай уҡ ҙур мәғрифәтселек проекттары өсөн тапшырыла. Документтар 2013 йылдың 1 майына тиклем ҡабул ителә.

✓14-15 мартта Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ауылында Төбәк-ара ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр конкурсы үтә. Конкурс ике йәш категорияһы буйынса үткәреләсәк: 16 йәшкә тиклемге һәм 16 йәштән өлкәнерәк ҡатнашыусылар. Иң яҡшылары ике турҙа билдәләнәсәк, һирәк башҡарыла торған көйҙәрҙән торған программаларға айырыуса иғтибар бүленәсәк. Шулай уҡ ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр танылған мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре етәкселегендәге оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнаша аласаҡ. Конкурсҡа ҡатнашыу өсөн заявкалар 10 мартҡа тиклем ҡабул ителә.

✓"Йомарт йөрәк" хәйриә марафоны Башҡортостандың баш ҡалаһында 2012 йылдың 7 ноябрендә старт алды. Был ваҡыт эсендә проект сиктәрендә Өфөлә йәшәүсе меңдән ашыу инвалид балаға ярҙам күрһәтелде. Акцияны ойоштороусылар - ҡала округы хакимиәте һәм Ильмира Харисова исемендәге "Мәрхәмәт" хәйриә фонды - инвалид етем балаларға, шулай уҡ инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә операциялар үткәреүҙә һәм артабанғы реабилитациялауҙа, йәшәү шарттары булдырыуҙа ярҙам күрһәтеүҙе төп маҡсат итеп ҡуя. Акцияны ойоштороусылар балалар яҙмышына битараф булмаған барлыҡ кешеләрҙе, бағыусыларҙы марафонда ҡатнашырға саҡыра. Белешмәләр өсөн: (347) 235-99-58.

✓Баймаҡта көньяҡ-көнсығыш райондары башлыҡтары ҡатнашлығында тәүге зона кәңәшмәһе үтәсәк. Унда 2012 йылға йомғаҡ яһаласаҡ, ауыл һәм урман хужалыҡтары, сауҙа, шулай уҡ экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу өлкәләрендә өҫтөнлөклө йүнәлештәр билдәләнәсәк. БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, территорияларҙы үҫтереү буйынса бындай зона кәңәшмәләре 22 ғинуарҙа - Баҡалыла, 25 ғинуарҙа - Тәтешлелә һәм 29 ғинуарҙа Стәрлетамаҡта үтәсәк.

*УЯН, УЙЛАН, КЕШЕ!*

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ...

## ҡатмарлы фекерҙәре...



### Уңғамы, һулғамы?

**Эйе, әҙәм яҡты донъяға йәбешеп ята. Ләкин маҡсатһыҙ, хыялһыҙ йәшәү әҙәмсә йәшәү тип һаналамы? Шайтан ғына өмөтһөҙ, тиҙәр, ә кеше нимәгәләр ынтылырға, кемгәләр ышанырға, ниндәйҙер бөйөк идея менән рухланырға, күңелен байытырға тейештер бит?**

Әлбиттә, яҡты донъяға тыуыу, баҡыйлыҡҡа күсеү Тәңре ихтыярында, ләкин тормош юлын әҙәм үҙе һайлай. Әкиәттәге кеүек: уңға барһаң - уңырһың, һулға барһаң... Ике тиҫтә йылдан артыҡ инде йәмғиәтебеҙ яһалма, көсләп бороп алып килеп ҡушҡан ике юл сатында. Ҡайҙа барырға? Абруйлы, арҙаҡлы әһелдәрҙе берләштергән академиялар, фирҡәләр ҙә, власть та - ләм-мим! Ғәҙеллек хаҡына әйтергә кәрәк, баҙар шарттарында йәшәйбеҙ, тип, тел болғап, ҡул һелтәп, юл күрһәтеләр. Ниндәй ниәт менән, ниндәй мөлкәт менән ул юлға баҫырға, ҡайҙа алып бара ул юл, нисек унан яҙлыҡмаҫҡа - уныһын әйтмәнеләр. Шуға күрә йәмғиәтебеҙҙең бөгөнгө йәшәү мәғәнәһе ҡайҙан тапһаң табып, алып һатыу ысулы менән мөлкәт туплауҙан ғибәрәт. Һуңғы ваҡытта өлкән быуын вәкилдәренең дәүергә талаптары ҡәтғиерәк була бара, ә бына тормош юлына яңы аяҡ баҫҡан йәштәр ҡайны юлды һайларға белмәй икеләнә һымаҡ. Сөнки матди байлыҡ хаҡына оят, выждан кеүек кешелек сифаттарын юғалтҡандар яҡшыраҡ йәшәгәне күҙҙәрҙе йомоп, ҡолаҡтарҙы томалаһаң да һиҙелә бит.

Күптәр, бигерәк тә йәштәр, шул икеләнеү, шикләнеү хистәренән алйыған мәлдә, уларға үҙҙәренең ихтыярын көсләп тағыусылар йәһәт табыла. Тәбиғәт бушлыҡты яратмай, ә күңелдәрҙә рухи бушлыҡ барлыҡҡа килһә, уны аламалыҡ һәм яһалмалыҡ баҫып ала. Фәҡәт ошо мәлдә, ошо сәбәптән йәмғиәт ҡағиҙәләрен, ҡанундарын һәм өйрәнелгән тәртипте үҙ мәнфәғәттәрендә үҙгәртергә теләүселәр әүҙемләшә. Һуңғы осорҙа, мәсәлән, йәһәннәмдән килдем, тип, күҙҙәрен дә йоммай хәбәр һөйләп, бындағы тормошто ундағыға айләндерергә теләүселәр ишәйҙе. Ысынлап та, уларҙың унда булыуы һәм хатта йәһәннәмдә юғары белем алыуҙары тураһында күҙ ҡамаштырырлыҡ мөһөрлө һәм аңды арбарлыҡ имзалы таныҡлыҡтары ла бар. Тик ниңәләр уларҙың барыһы ла тамуҡтан килгәндәр. Әлегә ожмахтан килеүселәр тураһында ишетелгәне юҡ.

Йәмәғәт, был шыпа юҡты һөйләй, тип уйлаһағыҙ, тирә-йүнегеҙҙе иғтибар менән байҡап сығығыҙ, улар һеҙҙең янда ла йөрөмәйме? Зәхмәттәре ҡағылып, йоғоп ҡуймаһын. Уларҙың йоғонтоһонан ҡотолоуы ауырайғандан-ауырая, сөнки беҙҙең арала улар ныҡлы төпләнеп, үҙҙәренең төрлө сектаһарын, төркөмдәрен ойоштора. Үҙҙәре тулһеҙ булғас, ойошмаларына әҙәми заттарҙың балаларын, йәштәрен, ололарын йәлеп итеп, йәндәрен аҙҙыралар, үҙ фәлсәфәләренә, үҙ йәшәү рәүеше, үҙ тәртиптәренә күндерәләр. Уларҙың юхаһына бирелгән бәгзеләр хатта мал-мөлкәтһеҙ, йорт-ҡураһыҙ тороп ҡала. Был донъяның аҙғындары һәм уларҙың ҡуштандары выждан, намыҫ, оялыу кеүек кешелеклек сифаттарын инҡар итеп, йыртҡыстарса мөнәсәбәттәрҙе хуплаған үҙ ҡанундарын урынлаштырырға теләй. Шул маҡсатта уларҙың ике йөҙлө вәкилдәре кешеләр араһында өгөт-нәсихәт тарата, ғәҙеллек, шәфҡәтлек, изгелек төшөнсәләрен онотторор, туғандарыңды ла алдап, шәхсән файҙаңды ғына хәстәрләү зарурлығы тураһында татлы хәбәрҙәр һөйләй. Еңел ышаныусылар алдында күҙ йәштәрен түккән булып, йәлләгән булып, ҡайһыларын юхалап, ҡайһыларын ҡурҡытып, ҡотҡо тараталар. Ғәҙәттә, хәбәрҙәре һәм ғәмәлдәре тик үҙҙәренең мәнфәғәттәрен тормошҡа ашырыу өсөн алдаҡ икән. Был донъяла һайлауҙар алдынан төрлө фирҡәләр халыҡ алдында нисек ике йөҙләнәнеп ҡылана, тамуҡ вәкилдәре лә шул уҡ ысулды ҡулланалар: үҙ маҡсаттарына өлгәшһәләр, иртәгәһенә үк уларға бер кем дә хәжәт түгел! Был хәлде Рәсәй халҡы һуңғы 25 йыл дауамында күҙәтә һәм өйрәнеп, күнеп тә бөткән шикелле. Ғәжәп, ләкин һәр ваҡыт енәйәтселәр, аҙғындар һәм алама ғәҙәтләр тиҙерәк берләшәләр...

*Иблис йөрөй арабыҙҙа.*
*Иблис йөрөй, йәмәғәт!*
*Иблис һүҙе ауыҙҙарҙа.*
*Иблис ғәмәле - афәт!*
*Иблис әҙәм сүрәтендә.*
*Иблис - шаян шүрәле.*
*Ҡытыҡ-мытыҡ уйнай төндә.*
*Көндөҙ - үсләшер мәле!*

Иблистәрҙең кешеләр араһында йөрөүе электән билдәле, ләкин уларҙың бөгөнгө кеүек әрһеҙләшеүе мирға мәғлүм түгел. Бындай көслө һөжүмдәрҙең сәбәбе ниҙә? Ысынлап та ахырызаман етеп киләме, әллә уны аңлы рәүештә яҡынайтып маташалармы? Ниндәй маҡсатта, ниндәй көстәр йә ниндәй иблистәр тормошҡа атҡара был ниәттәрен? Ҡайһы донъя ысын - рухиәтле, шәфҡәтле, ғәҙеләме, әллә... Күп тәжрибәле кешеләккә күптән айыра белергә ваҡыттыр инде! "Кәрҙәштәр, юлдан яҙып, донъябыҙҙы юғалтып барабыҙ бит!" тип ҡысҡырғы килә... Кешеләрҙең аңын, йәнен томалап, рухһыҙ, хисеҙ хайуандарға әүерелдереп, үҙҙәренә буйһондороп, мәңгелеккә ҡоллоҡҡа алырға хыялланған иблистәрҙең маҡсаттарын фашлау - һәр аҡыллы кешенең намыҫ бурысы! Һәр кем выжданлыҡ позицияларын шәхсән ҡыйыулыҡ күрһәтеп яҡлаһа һәм һаҡлаһа, күргән, белгән, ишеткәндәренә битараф булмаһа, аҙғынлыҡ, аңһыҙлыҡ, вайымһыҙлыҡ беҙҙе һис ваҡытта ла еңә алмаҫ, иншаллаһ!

*Ян-яғыңдан ҡуштанлашып,*
*өтәләрҙәр,*
*Күңелеңдә күргән булып,*
*эркелерҙәр.*
*Шайтан менән ҡосаҡлашып*
*йәшәгәндең*
*Ен-пәрейҙәр эргәнендә*
*иркәләрҙәр.*
*Ҡыҙыҡ-мыҙыҡ хәбәр һөйләп,*
*көлдөрөрҙәр,*
*Ярҙам иткән кеше булып,*
*бөлдөрөрҙәр.*
*Шүрәләләр ҡытығына*
*бирешкәндең*
*Ен-пәрейҙәр ауыҙына*
*төкөрөрҙәр.*
*Сират күперенә алдан*
*үткәрерҙәр,*
*Һинең өсөн хатта сәсәп,*
*йүткерерҙәр.*
*Иблис менән ике ҡуллап*
*көрешкәндә*
*Ен-пәрейҙәр аҙаштырып*
*үлтерерҙәр.*

**Урал МОСТАФИН.**

*ИШАРА*

# ТЫНЫСЛЫҠТЫ...

## яратмай шул Дейеү

**Гәзитебеҙҙәге көнүҙәк мәсьәләләргә арналған мәҡәләләр "Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Үҙ фекерегеҙҙе яҙып ебәрегеҙ" тип тамамланһа ла, ил етәкселәренең "Үҙ фекерендә үҙ эсеңдә тот" тигән кәңәшен уҡыпмы, халыҡ үҙ фекерен яҙырға ашыҡмай. Беренсенән, барыбер гәзиткә баҫмаҫтар, баҫһалар иһә, гәзиткә зыяны тейер, тип ҡурҡыта шул. Тик шағир Дамир Шәрәфетдинов яҙғанса:**

*Миңә генә кәрәк үкһеҙлектә,*
*Тертләп китеп мәлһеҙ уяныу…*

Эйе, һәр кем үкһеҙлектә уйланалыр ҙа ул, тик шымып ултыра. Бына "Киске Өфө"ләге былтырғы йылдың һуңғы һанында "Кыңғырауҙың эсе буш" әйтеме хаҡында фекер йөрөтөлдө. Автор менән һүҙ көрәштермәйем, дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, тиҙәр. Ә бына фәрештә менән һүҙ көрәштерер инем. Үткән быуаттың бик йәш япон шағиры Исикава Токубоку хатта:

*Во сне я с Богом спорил,*
*И в слезах проснулся... - тип яҙа.*

Шағир төшөндә илай-илай Алла менән ни тураһында бәхәсләшкәндер, унынһына үҙем ҡыйыулыҡ итә алмаҫ инем, ә фәрештә менән бәхәс ул тиклем оло гонаһ түгелдер, тип уйлайым. Ғүмере буйы баш күтәрмәй, тир түгеп, ҡара эш менән мәшғүл кешене нисек бәхетле тип атай һуң ул фәрештә? Ә элекке СССР, әлеге Рәсәй халҡын алһаң, илде тәҙәкләндерер өсөн ғүмер буйы кескәй генә эш хаҡына бил бөккән һәм бөгөн килеп улар бар иткән бөтә ил байлығына олигархтарҙың хужа булып алыуына шаһит халыҡты, бәхетле, тип кем әйтер? Һәр хәлдә, намаҙ уҡып ҡына муллыҡта йәшәүсе менән баш күтәрмәй тигәндәй эшләп тә, мандып китә алмай йәшәгәндең бәхеттәрен үлсәп, икегеҙ ҙә бер тигеҙ бәхеткә эйә булғанһығыҙ, тип әйтеүсе фәрештә ябай халыҡ өҫтөнән көләләр һымаҡ тойолдо миңә. Тик был хикәйәт, риүәйәт башҡорт халҡы хаҡында түгелдер, тип таптым. Башҡорттоң эштә лә, дин тотоуҙа ла борондан килгән сама йолаһы булған. Унан һуң, эшләй ҙә, күңел аса ла белә халҡым. Ошо урында шағир Хисмәт Юлдашевтың гәзитебеҙҙә баҫылып сыҡҡан "Тубыҡланыу" шиғырын уҡыһаҡ, урынлы булыр, тип уйлайым.

*Иблис көйҙәренә генә,*
*Йәнһәне лә йырлап-бейеп,*
*Тубыҡланыр, тиеп беҙҙе,*
*Инде башын эйер, тиеп,*
*Ҡыуандың, ахыры, иртәрәк,*
*Океан артындағы Дейеү.*
*Баҙар шауы башка ҡубып,*
*Тубыҡланһаҡ, тубыҡландыҡ,*
*Һис кенә лә йығылманыҡ,*
*Шуныһы ла булһын аныҡ:*
*Асылына ҡайтҡан һайын,*
*Нурландырып изге айын,*
*Иҫтән юймай рухландырған*
*Салауатты һәм Юлайын,*
*Баҫҡан һайын намаҙлыҡҡа,*
*Батмаҫын белеп һаҙлыҡҡа,*
*Доға ҡыла тубыҡланып*
*Яуға ҡаршы тороп халыҡ!*

"Кеше кешегә дуҫ һәм иптәш" лозунгыһы иманлы халҡыбыҙҙа, уның күңелендә һәм ҡанында, шуға ла бер ҡасан да юйылмаҫ. Тик Хисмәт Юлдашев яҙғанса "Океан артындағы Дейеү" тынғы белмәй, аҡсаға һатып алып, төркөмдәр ойоштороп, динде - дингә, кешене кешегә ҡаршы һөсләтеүен дауам итә. Тыныслыҡты, имenlекте яратмай шул ул Дейеү.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Әлеге ваҡытта Өфөлә дөйөм алғанда 10 меңдән ашыу бала балалар баҡсаһына сиратта тора. Үткән йылдарҙа Өфөлә йылына 3-4 балалар баҡсаһы төҙөлһә, 2012 йылда 10 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы файҙаланыуға тапшырылды. Шул уҡ ваҡытта Өфөлә 57 шәхси балалар баҡсаһы эшләй, уларҙа 1-3 йәштәрҙәге 1100 сабый тәрбиәләнә. Уларҙың һигеҙенең белем биреү эшмәкәрлегенә лицензияһы бар. Бер ай өсөн уртаса хаҡ 8-14 мең һум тәшкил итә. Шәхси балалар баҡсалары етәкселәре хәбәр итеүенсә, аҡсаның зур өлөшө - 40 проценттан ашыуы - аренда өсөн түләүгә китә.

✓Өфөлә етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыуҙың артыу тенденцияһы күҙәтелә. 2011 йылда ҡаланың интернат учреждениеларында 500-гә яҡын бала тәрбиәләнһә, бөгөн уларҙың һаны 470-кә тиклем кәмегән. Бөгөнгө көндә Өфөлә ике балалар йорто, ике приют һәм бер сабый йорто эшләй. Етем балаларҙы ғаиләләргә алырға теләүселәр баш ҡала округы хакимиәтенең Опека һәм попечителлек буйынса идаралығына шылтыратa ала. Тел.: 279-91-80, 279-91-84.

✓Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле Амур Хәбибуллин менән Башҡортостан юлдаш телевидениеһының генераль директоры Ғәлим Яҡупов Өфө һәм Силәбе өлкәһе эшҡыуарҙары араһында телекүпер үткәреү тураһында һөйләшеп килеште. Яҡтар Башҡортостан юлдаш телевидениеһы каналын Силәбе өлкәһендә популярлаштырыу, башҡорт концерттары ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе. Һөйләшеү барышында шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге Даими вәкиллеге эшмәкәрлеген һәм республиканан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың тормошон яҡтыртыу буйынса Силәбе өлкәһе телеканалы менән Башҡортостан юлдаш телеканалы араһында төҙәлгән килешеүҙе 2013 йылға оҙайтыу тураһында һөйләшеп килешелде.

✓Белорет ҡалаһының Яныбай Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһы уҡыусылары Зөлхизә Хәмзина, Линара Мостафина, Руслан Нәсихов Санкт-Петербург ҡалаһында үткән "Планета киләсәге" халыҡ-ара балалар-үсмерҙәр ижады конкурсының "Һынлы сәнғәт" номинацияһында беренсе урын яуланы. Бәйгелә Магадан, Тула, Сахалин өлкәләренән, Приморье, Алтай крайынан, Якутия (Саха), Татарстан, Коми республикаларынан йәмғеһе 600-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. Улар вокал, драма, хореография сәнғәте номинацияларында көс һынашты.

✓ *Тиҙҙән ҡаланың барлыҡ райондары ла бассейнлы булыуы ихтимал. Яҡын киләсәктә биш бассейн төҙөү планлаштырыла. Улар өсөн территориялар, майҙансыҡтар әҙер.*



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# "КЕЙЕМЕНӘ" ҠАРАП...

**Баш ҡала архитектураһы күҙгә күренеп үҙгәрә, хатта Өфөнө үҫешкән Европа илдәре менән сағыштырып, бер аҙ маһайтып та ебәрәләр, шикелле. Ысынлап та, һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә ҡалабыҙ бөтөнләй икенсе төҫ алды. Әммә элекке "хрущевка"лар ғына уның бөгөнгө "образына" бер аҙ тап килмәгән кеүек. Ләкин халыҡта бик тапҡыр әйтем бар: ауыҙың ҡыйыш булғанға көҙгөгә үпкәләмә. Ысынбарлыҡта, ҡасандыр тап ошо "хрущевка"лар иң абруйлы, иң матур йорттар булып һаналһа, заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, бөгөн улар иҫке күлдәк кеүек: кейергә, йәғни, кешегә күрһәтергә оят, сығарып ташларға йәл... Ә бит ҡалаларҙың да, кешеләрҙе кейеменә ҡарап ҡаршы алған кеүек, иң элек тышҡы йөҙөнә ҡарап фекер йөрөтәләр.**

Ҡала округы хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө буйынса баш идаралығы начальнигы Илдар Ибраһимов яңы йылда уҙғарған тәүге матбуғат конференцияһында башҡа көнүҙәк мәсьәләләр менән бер рәттән, тап ошо категорияға ҡараған торлаҡ тураһында ла һүҙ алып барҙы. Бөгөн бындай йорттарҙы мөмкин тиклем заманса формаға килтерергә тырышалар, ләкин уларҙы бер нисек тә күп ҡатлы йорттарға әйләндереү мөмкин түгел, сөнки проект буйынса уларға лифт эшләү, физик мөмкинлектәре сикле граждандарға уңайлыҡтар тыуҙырыу ҡаралмаған. Шуға күрә уларҙы тота һалып заманса үҙгәртеү йәки емереп ташлап, улар урынына яңы йорттар һалып булмай: был территорияла йәшәүсе граждандарҙың мәнфәғәте лә күҙ уңынан ысҡындырылырға, уларҙың хоҡуҡтары ла боҙолорға тейеш түгел. Ҡануниәткә ярашлы, хосусилаштырылған фатирҙарҙа йәшәүселәр торлаҡ йорттарҙағы дөйөм ҡулланылыштағы майҙандарға, йорт алдарындағы территорияға хоҡуҡлы. Тимәк, бында бер генә юл ҡала - булғанды камиллаштырырға, ә инде тәртипһеҙ рәүештә урынлашҡан йорттар (үкенескә күрә, ундай күренештәр ҙә бар) араһындағы "утрауҙар"ҙа яңы йорттар төҙөргә.

Ғөмүмән, ҡала округы территорияһында төҙөлөш эштәре ғәмәлдәге ҡанундар, 2006 йылда ҡабул ителгән Генераль план, Ер менән файҙаланыу һәм төҙөлөш ҡағиҙәләре, Ҡала төҙөүҙе проектлау нормативтары нигеҙендә алып барыла. Биш йыл эсендә ҡала территорияһын планлаштырыу һәм уны сиктәргә бүлеү буйынса проекттар эшләнгән һәм улар буйынса 88 депутат тыңлауҙары үткәрелгән, 78 проект раҫланған. Бөгөн баш ҡалала төҙөлөш, ҡаланың үҫеше өсөн төп проблема булып яңы торлаҡ райондары төҙөү өсөн территорияларҙың наҡыҫлығы, мәҙәни-тарихи мираҫ объекттарын һаҡлау һәм уларҙы популярлаштырыу мәсьәләләрен иҫәпкә алып, территорияларҙы реконструкциялау, инженер-транспорт инфраструктураһын үҫтереү, селитеб территорияларҙа торлаҡ һәм йәмәғәт функцияларының оптималь нисбәтен булдырыу тора.

Быға тиклем дә беҙ баш ҡаланың ниндәй үҙгәрештәр кисерәсәге, ниндәй төҙөлөш һәм төҙөкләндереү эштәре алып барыласағы хаҡында даими таныштырып барҙыҡ, шулай ҙа иң мөһим урынды Конгресс-холлдың тирә-яғындағы территория алып торасаҡ. Ул бер заман килеп баш ҡаланың иң матур урындарының береһенә әүерелеренә өмөт бар. Унда парк, скейт-парк, велосипед юлы, әүҙем тормош алып барыусылар өсөн спорт майҙансыҡтары урын аласаҡ. Берҙәм концепция БДУ, "Динамо" стадионын да үҙ эсенә аласаҡ.

Әйткәндәй, тиҙҙән ҡаланың барлыҡ райондары ла бассейнлы булыуы ихтимал. Яҡын киләсәктә биш бассейн төҙөү планлаштырыла. Улар өсөн территориялар, майҙансыҡтар әҙер. Был бассейндар 25 метрлыҡ юлдарға иҫәпләнә, ләкин кәрәк икән, 50 метрлыҡ бассейндар эшләү мөмкинлеге лә бар.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*АФАРИН!*

# "КИСКЕ ӨФӨ" -

## лауреаттар араһында!

**Был фотола "Киске Өфө" гәзитенең ижади коллективы ағзаларын күрәһегеҙ. Ә ҡулдарындағы ике диплом - гәзит коллективына бирелгән лайыҡлы баһалама. "Киске Өфө" гәзите Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы һәм Журналистар союзы иғлан иткән ике конкурста еңеүсе булды: Рәсәй тарихы йылына арналған конкурс һөҙөмтәләре буйынса - 1-се урынға, Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәрен үҫтереүгә арналған бәйгелә 2-се урын яуланы.**



Матбуғат баҫмалары эшенең былтырғы йомғаҡтарын барлау, конкурстарҙа еңеүселәрҙе бүләкләүҙәр 13 ғинуарҙа Рәсәй журналистарының профессиональ байрамы көнөндә ойошторолдо. Редакциялар коллективтары, айырым журналистар эштәре биш конкурс буйынса баһаланды. Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов үҙенең ҡотлау һүҙендә, журналистар ил тормошондағы хәл-ваҡиғаларҙы асыҡ һәм аныҡ яҡтыртыусылар, мәғлүмәтте халыҡҡа аңлайышлы телдә һәм оператив рәүештә еткерә белеүселәр һәм дәүләт органдары менән халыҡ араһында тығыҙ бәйләнеш урынлаштырыусылар, шуға күрә уларҙың хеҙмәте йәмғиәтебеҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ, тип билдәләне.

Әлбиттә, журналист башлыса үҙенең геройҙарын танытыу, уларҙы лайыҡлы баһалатыуға өлгәшеү өсөн тырышыусы, халыҡ мәнфәғәтен беренсе урынға ҡуйып ижад итеүсе һөнәр эйәһе. Шулай ҙа уларға үҙ ижадының лайыҡлы баһаланыуы ла ҡиммәт.

*ЙӨҘ ОЯЛМАҺЫН...*

# ХАТАЛЫ ЯҘЫУҘАР

**Республикабыҙҙың баш ҡалаһында һуңғы йылдарҙа алтаҡталарҙағы хаталар һиҙелерлек кәмене. Был ҡала, район хакимиәттәре алып барған сараларҙың, йәмәғәтселек вәкилдәре тырышлығының һөҙөмтәһе булды.**

Һуңғы йылдарҙа баш ҡала округы хакимәте ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәре тураһындағы законды ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссия ағзалары тарафынан даими аңлатыу эштәре алып барылды, рейдтар үткәрелеп торҙо. Был эштә телебеҙгә битараф булмаған кешеләр ҙә әүҙем ҡатнашты. Республика баҫмалары, телевидение ла ситтә ҡалманы. Даими ойошторолоп торған конкурстар ҙа ҡалабыҙ йөҙөн йәмһеҙләүсе хаталы яҙыуҙарға күптәрҙең иғтибарын йәлеп итте.

Был көрәштән ситтә тормаған кеше булараҡ, атҡарылған эштең һөҙөмтәһе барыбер ҙә үҙен һиҙҙерҙе, тип әйтә алам. Элек предприятие, ойошмалар алтаҡталарында, реклама таҡталарында аҙым һайын хаталар осратырға тура килһә, бөгөн улар күренмәй тиерлек. Ә әлеге фотоларҙа күрһәтелгән хаталарҙы табыу өсөн байтаҡ ваҡыт сарыф итергә кәрәк булды. Уларын да кисекмәҫтән төҙәтеп ҡуйырға ине. Баш ҡалабыҙҙа наҙандар булмаҫҡа тейеш!

**Илдар ҒӘБИТОВ.**
















## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң "Дуҫлыҡ" халыҡ бейеүҙәре ансамбле Санкт-Петербургта үткән "Раштыуа алдынан" халыҡ-ара балалар һәм үҫмерҙәр ижады фестиваль-конкурсында Гран-при яуланы. Бәйгелә ижади коллектив "Шатлыҡ" һәм "Бөркөттәр иле" тип аталған ике башҡорт бейеүен тәҡдим итте. Өфө ансамбле барыһын да бейеүҙәрҙең сағыу ҡуйылышы, матур костюмдар менән таң ҡалдырҙы, тип билдәләй жюри ағзалары. Конкурста 20 ҡаланан 300-гә яҡын ҡатнашыусы сығыш яһаны.

✓Өфө хакимиәте сайтының туристик-мәғлүмәт порталында булдырылған яңы бүлек "Өфөнән - Башҡортостан буйлап" тип атала. Унда Башҡортостандың һәм уның баш ҡалаһының төп туристик маршруттары, иҫтәлекле урындары, шифаханалары һәм ял йорттары тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт урынлаштырылған. Республиканың иң популяр, ҡыҙыҡлы, инфраструктура йәһәтенән үҫешкән туристик зоналарын бер урынға туплау әлеге бүлектең төп маҡсаты булып тора.

✓"Һылыуҡай" республика конкурсына әҙерлек бара. Тәүге һайлап алыу туры 21 ғинуарҙа - Сибайҙа, 23 ғинуарҙа - Стәрлетамаҡта, 25 ғинуарҙа - Нефтекамала, йомғаҡлау туры 28 ғинуарҙа Өфөлә Телеүҙәк бинаһында ойоштороласаҡ. Конкурста ҡатнашыуға 16 йәштән 23 йәшкә тиклемге, буй оҙонлоғо 168 см булған, башҡорт телендә һөйләшә белгән гүзәлдәр саҡырыла. "Һылыуҡай"ҙың финалы 6 мартта "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында үтәсәк.

✓Өфө ҡалаһының Ленин районы хакимиәтендә Өсөнсө быуын халыҡ университетын асыу тантанаһы һәм тәүге лекциялар үтте. Ветерандарҙы берләштереү, тормош тәжрибәһе менән уртаҡлашыу, оло йәштәге кешеләрҙең йәмғиәт тормошонда ҡатнашыуын әүҙемләштереү университеттың төп маҡсаты булып тора. Бөтә республика буйлап тормошҡа ашырылған әлеге проект белем биреү генә түгел, социаль йүнәлеште лә үҙ эсенә ала.

✓Башҡорт дәүләт филармонияһы тәүгә буласаҡ әсәләр өсөн концерттар ойоштора. Тәүге бындай саралар 2 һәм 9 февралдә Орган залында үтә. Мәҙәни проект Өфөнөң һаулыҡ һаҡлау учреждениелары ярҙамында тормошҡа ашырыла. Унда психологтар, педиатрҙар, гинекологтар һәм башҡа табиптар ҡатнашасаҡ. Ауырлы ҡатындар һәм әсәләр өсөн орган, флейта, ҡурай һәм ҡыллы музыка ҡоралдарында классик әҫәрҙәр башҡарыласаҡ.

✓ *Үҙебеҙҙәге хәлдәргә ҡайтһаҡ, беҙҙе шундай һөйөнөслө хәбәрҙәр көтә: быйыл хеҙмәт пенсиялары ике тапҡыр: 1 февралдән һәм 1 апрелдән йәмғеһе 10 процентҡа арттырыласаҡ.*



*ЯҢЫ ЗАКОНДАР*

# АШЫҠМА КИЛЕРГӘ, ҠАРТЛЫҒЫМ...



**Рәсәйҙең пенсия системаһы тураһында һүҙ сыҡҡан һайын, күңелде шөбһәләнеү, хәүеф тойғолары, үҙеңдең дә хатта күптәр тарафынан йәмғиәтебеҙ өсөн "артыҡ тамаҡ" тип ҡаралған ошо ҙур ғаилә ағзаһы булыуың өсөн ғәйеп тойғоһо биләп ала. Кемгә нисектер, ә минең күҙ алдына Рәсәйҙең пенсия системаһы таяҡ таянған, тишек-тошоҡ тоҡ артмаҡлаған һәләмә кейемле бәлтерәп бөткән бер ҡартты күҙ алдына баҫтыра.**

Бигерәк тә Рәсәй пенсионерҙары хаҡында һүҙ сыҡҡанда иң тәүҙә меҫкенлек, фәҡирлек кеүек төшөнсәләр ҡулланыла. Эйе, ҙур "армия" бөгөн пенсионерҙар сафы: илдәге халыҡтың сама менән дүрттән бер өлөшөн тәшкил итә оло йәштәгеләр. Ләкин,"ҡараһаң яҡшы ғына", уның сафтарында һәр бер йәш йәки урта йәштәгеләрҙең иң яҡын, ҡәҙерле кешеләре - атай-әсәйҙәре, ҡартатай-өләсәйҙәре бар. Барланығыҙмы яҡшылап? Хәҙер әйтегеҙ инде: меҫкендәрме улар, йәки фәҡирҙәрме? Советтар Союзы тип аталған ҡеүәтле державаның байрағын тотоп килеүселәр, завод-фабрикаларҙа, домна мейестәрендә ҡорос менән бергә ҡайнап, икһеҙ-сикһеҙ иген баҫыуҙарында әсе тирен түгеп хеҙмәт сынығыуы алған эшсән, илһөйәр, әҙәп өлгөһө булырлыҡ кешеләр бит уларҙың күпселеге. Ләкин ғүмер буйы иле мәнфәғәте өсөн көс түккән пенсионерҙарға айына уртаса 8-10 мең аҡса түләү кемдәргәлер бик күп тойола. Пенсия фондының бюджет наҡыҫлығы тирәләй, пенсионерҙар һаны йылдан-йыл арта, ҡаҙнала улар өсөн аҡса юҡ, тигән зарланыуҙарҙы беҙ хәҙер 30 уҡ булмаһа ла, 20 йыллап ишетеп киләбеҙ. Ә бит ошо дәүер эсендә пенсия тәьминәтенең ышанысл механизмын эшләп булмай инеме ни?

Пенсияға сығыу йәшен кисектереү хаҡында ла әллә күпме бәхәс булды. Проблеманы тамырынан хәл итеүҙә шунан да йүнлерәк сара юҡ, тип уйлай икән бәғзе берәүҙәр - уларға яуап шул: өлкән быуынды эш менән ҡурҡытып булмай, күптәр барыбер хаҡлы ялға сыҡһа ла эшләүен дауам итә, сөнки пенсия барыбер етмәй. Был идеяның авторҙары "батып барыусыны ҡотҡарыу - батып барыусының үҙ эше" тигән ҡараштан сығып эш итһә, хөкүмәт тә башҡа төрлөрәк ресурстар эҙләү буйынса баш ватып торманы: әлеге принцип - "үҙеңә кәрәк - үҙең йүнлә" яңы пенсия реформаһының нигеҙенә ятты. Һүҙ пенсияның тупланма өлөшөнә 1967 йыл һәм унан һуң тыуған һәр эшләп йөрөүсе кешенең хеҙмәт хаҡынан 6 процент күсереп барыу тәртибе тураһында бара. Рәсәй Хөкүмәте Премьеры былтырғы йылда иң ҙур янъял тыуҙырған документҡа ҡул ҡуйҙы: 2030 йылға тиклем Рәсәй пенсия системаһының оҙайлы үҫеш стратегияһы хупланды. Илебеҙҙә, шулай итеп, яңы пенсия реформаһы көтөлә. Әлеге 6 процент тупланманан йылына йөҙәрләгән миллиард аҡса йыйыла. Был аҡса, вәғәҙә итеүҙәренсә, буласаҡ пенсионерҙарҙың шәхси иҫәбендә һаҡланасаҡ һәм... Пенсия фонды ҡаҙнаһының тишек-тошоғон ҡаплауға яҡшы "ямау" булмаҡсы. Әйткәндәй, Президент Владимир Путин был системаға кешеләрҙең теләк буйынса йәлеп ителергә тейешлеге тураһында белдерҙе. Әле эш хаҡының 6 проценты тупланма өлөшкә мотлаҡ күсерелә килһә, яңы законда ул 2 процентҡа ҡалдырылып, ҡалған 4 процент яҙмышын һәр кем үҙе теләгәнсә хәл итә ала, тип әйтелә.

Социологтар үткәргән һорау алыуҙарҙан күренеүенсә, рәсәйлеләрҙең 70 проценты ҡартлығында фәҡәт пенсия аҡсаһына өмөт итә, сөнки төрлө сәбәптәр арҡаһында, айырыуса сәләмәтлеге торошо буйынса бөтә кеше лә бәлтерәгәнсә эшләп йөрөй алмай. Әйткәндәй, әлеге ваҡытта юғары эш хаҡы алып эшләп йөрөүсе өлкән йәштәгеләргә пенсия түләүҙән баш тартырға, тигән тәҡдим бик тә урынлы булмаҡсы. Ә бына сараһыҙҙың көнөнән хаҡлы ялын ял итмәй, ек күремсеһе булһа ла эшләп йөрөүсе өлкәндәрҙең хәле - бөтөнләй икенсе мәсьәлә. Кемгәлер үҙе менән бергә олоғайып барһа ла мандымаған балаларының ғаиләһен аҫырырға, балаларын, ейәндәрен түләп уҡытырға, ғаиләһендәге берәй ауырыуҙың дауаланыуына аҡса кәрәклектән эшләргә тура килә. Дәүләт тарафынан бындай категория граждандар аңлау һәм яҡлау таба, әлбиттә. Аҡмаһа ла тамып тора, тик тинләп, әҙләп кенә тама шул, көнләп түгел, сәғәтләп үҫә барған хаҡтарҙы ҡыуып та етерлек түгел. Ә шулай ҙа шөкөр итәйек, оло быуын түҙеп, сабыр итеп өйрәнгән бит. Юғиһә, донъяла ҡарттарҙан ҡотолоуҙың төрлө әмәлдәре лә бар икән. Ана, маҡталған Германияны ҡарағыҙ әле: ҡарттарҙы илдән депортациялау башланған унда, тәүбә, әстәғәфирулла! Булыр ул немецтарҙан. Федераль статистика мәғлүмәттәре буйынса, 400 мең ҡарт-ҡоро сит илгә сығарып ебәрелгән, шуларҙың 7 меңе былтыр Венгрияла , 3 меңе - Чехияла, ҡалғандары Словакияла, Испанияла, Грецияла , хатта ки Таиландта һәм Украинала ла көн күрә икән. Германияла йәшәү хаҡы юғары булғанлыҡтан, ҡарттар үҙҙәренең көнкүреш сығымдарын түләүгә һәләтһеҙ, ә сит илдә был уларға арзанғараҡ төшә, тип аңлата икән был хәлде Германия властары. Үҙебеҙҙәге хәлдәргә ҡайтһаҡ, беҙҙе шундай һөйөнөслө хәбәрҙәр көтә: быйыл хеҙмәт пенсиялары ике тапҡыр: 1 февралдән һәм 1 апрелдән йәмғеһе 10 процентҡа арттырыласаҡ. Эйе, йүнле генә пенсия алһа, хаҡлы ялда ятыр ине ветерандар, тип әйтеү бик дөрөҫ тә булмаҫ ине, сөнки беҙҙең өлкән быуын менталитеты немецтарҙыҡынан айырмалы бөтөнләй башҡаса. Беҙҙекеләр эшләмәйенсә, кемделер хәстәрләмәйенсә, үҙен генә ҡайғыртып йәшәй алмай. Икенсенән, уларҙың эш тәжрибәһе - коллективтары өсөн алыштырғыһыҙ хазина булыуын бер кем дә инҡар итмәҫтер. Ошо факторҙы ла иҫәпкә алып, моғайын, Президент В.Путин "Рәсәй Федерацияһында дәүләт граждандар хеҙмәте тураһында" федераль законға үҙгәрештәр индерҙе. Был дәүләт граждандар хеҙмәтенең юғары вазифалағы төркөм етәкселәренә ҡағыла. Был категория хеҙмәткәрҙәрҙең пенсияға китеү ваҡытын кисектереү фәҡәт уларҙың ризалығы буйынса ғына ғәмәлгә ашырыла. Яңы норма юғары квалификацияға эйә тәжрибәле дәүләт граждандар хеҙмәткәрҙәрен һаҡлау маҡсатынан сығып эш итә.

Ҡартлыҡ алдында, эйе, бөтәһе лә тигеҙ, ләкин ҡартайырға, бөгөлөргә ашыҡмаусылар һәр саҡ, һәр ерҙә өҫтөнлөккә эйә - был бәхәсһеҙ. Мостай Кәрим әйтмешләй, "Ашыҡма килергә, ҡартлығым..." тип, тормошҡа, хеҙмәткә, кешеләргә, изгелеккә тартылып, һәр тыуыр көнөндә тыныс күңел менән имен-аман ҡаршылап, үҙ илеңдә яҡындарың менән бергә йәшәү - шундалыр ул әҙәм ғүмеренең ысын ҡиммәте.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ИҠТИСАД КӨНДӘЛЕГЕ*

# АҠСА ҒЫНА ТҮГЕЛ...
## эсәр һыу ҙа етмәй

**Яҡын киләсәктә донъяла урта синыф юҡҡа сығырға мөмкин. Давоста үтәсәк Бөтә донъя иҡтисад форумы алдынан иҡтисадсылар ошо хаҡтағы фараздары менән бүлеште.**

Һорау алыуҙа ҡатнашҡан меңдән артыҡ эксперт билдәләүенсә, йылдан- йыл байҙар һәм ярлыларҙың йәшәү кимәле айырыла бара һәм ул артабан да ошо юҫыҡта дауам итәсәк. Был, үҙ сиратында, урта синыфтың бөтөнләй юҡҡа сығыуына килтерәсәк. Ә урта синыфтың юғалыуы үтә лә хәүефле, тиҙәр улар, сөнки төрлө тауар һәм хеҙмәттәргә һорау ҡырҡа кәмейәсәк һәм илдәрҙең иҡтисады ла үҫмәйәсәк.

Киләһе ун йылда буласаҡ хәүефтәр исемлегенә шулай уҡ донъя иҡтисадындағы аңлашылмаусанлыҡтар ҙа индерелгән. Әлеге ваҡытта АҠШ, Япония, европа илдәре күтәрә алмаҫлыҡ кредиттар йыйған һәм уларҙы нисек ҡайтарыу тураһында баш вата. Әгәр ҙә йомро баштар ниндәйҙер юл тапмаһа, бар донъя иҡтисады ҙур тетрәнеүҙәр кисерәсәк. Әйткәндәй, донъяла аҡса ғына түгел, шулай уҡ аҙыҡ-түлек һәм эсәр һыу ҙа етмәй.

Бөтә илдәрҙә лә тиерлек күҙәтелгән пенсия системаһындағы проблемалар ҙа шулай уҡ тиҙ арала хәл итеүҙе көтә. Эксперттар фекеренсә, әгәр ҙә тейешле һәм етди реформалар үткәрелмәһә, был системалағы мәсьәләләр ҙә илдәрҙең бюджетына ҙур зыян килтерәсәк.

# ҠАЙҘА КҮБЕРӘК...
## иҡтисади ирек

**Донъя илдәренең ҡайһыһында иң ирекле иҡтисад? Ошоно асыҡлау маҡсатында йыл һайын Американың Heritage Foundation тикшереү институты Wall Street Journal гәзите менән берлектә "Иҡтисади ирек индексы" исемле тикшеренеүҙәр үткәрә.**

Тикшерелгән 177 ил араһында Рәсәй 51,1 балл менән 139-сы урынды биләй. Ә иҡтисад өсөн иң ирекле ил тип тағы ла Гонконг табылған. Доклад авторҙары Гонконгка 100 баллыҡ система буйынса 89,3 бал ҡуйған. Әйткәндәй, Гонконг был исемлектә 19 йыл рәттән тәүге баҫҡысты биләй. Икенсе урында - 88 балл менән Сингапур килә. Һөҙөмтәләре 80 баллдан артыҡ булған биш ил рәтенә шулай уҡ Австралия, Яңы Зеландия һәм Швейцария ла инә. Уларҙан һуң Канада, Чили, Маврикия, Дания һәм АҠШ килә. Иң күп халыҡ йәшәгән Ҡытай - 136-сы урында. Исемлекте Зимбабве, Куба һәм Төньяҡ Корея яба.

Рейтинг төҙөгәндә белгестәр төп ун мәғлүмәтте күҙ уңында тотоп тикшереү уҙғарған. Улар рәтенә теге йәки был илдәге иҡтисади һәм һатыу ирекле ге кимәле, инвестицион йәһәттән асыҡ булыу, дәүләттең иҡтисадҡа ҡыҫылыуы, коррупция факторы һәм башҡалар инә. Быйылғы тикшереүҙән һуң Wall Street Journal гәзите "донъяла йылдан-йыл иҡтисади ирекл ек кәмей бара", тип белдерҙе.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Йоҡоһоҙлоҡ



❖ Бесәй (валериана лекарственная) үләне тамыры - 40 грамм, ҡомалаҡ тубырсыҡтары - 30 грамм, бөтнөк (мята) үләне япраҡтары - 15 грамм. Төнгөлөккә йылы һыу менән төнәтергә ҡуйып, иртән һөҙөргә һәм кисен йылытып, сәй итеп эсергә. Был сәй айырыуса оло кешеләргә файҙалы.

❖ Һары мәтрүшкәне һабағы менән ваҡларға. 2 балғалаҡ үләнгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм 5 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр, ашар алдынан 50-шәр грамлап эсергә. Дауалауҙы 3-4 аҙна дауам итергә.

❖ 1 стакан һоло онтағына 5 стакан һыу ҡойоп, һыуҙың яртыһы кәмегәнсә ҡайнатырға. Һөҙөргә, 2 стакан һөт өҫтәргә, яңынан ҡайнатырға. 4 балғалаҡ бал өҫтәп, килеп сыҡҡан эсемлекте йылытып, көн буйына эсергә. Дауаланыу курсы - 4 аҙна.

❖ Гәрсис ваннаһына аяҡтарҙы һәм ҡулдарҙы тығып ултырыу ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә. Бындай ванналар ҡан тамырҙарын сыныҡтыра, эске ағзаларҙағы ҡанды тотош организмға ҡыуалай. Бының өсөн 1-2 ҡалаҡ ҡоро гәрсис порошогын туҡымаға төрөп, йылы һыулы биҙрәгә төшөрөгөҙ, туҡыманы бер нисә тапҡыр һығып алығыҙ. Һыу температураһы 35-37 С булырға тейеш. Ҡулдарҙы терһәккә тиклем, аяҡтарҙы тубыҡҡа тиклем һыуға тығып, 10-20 минут ултырырға.

❖ Йоҡоһоҙлоҡто дарыу үләндәре һалынған яҫтыҡтар ҙа дауалай. Мелисса, бөтнөк, һары мәтрүшкә, ҡомалаҡ тубырсыҡтары тынысландырыу һәләтенә эйә булған эфир майҙарынан тора. Үлән тултырылған яҫтыҡты баш осона ҡуйырға. Был үләндәрҙән тыш, яҫтыҡҡа аҡ сәскә, рауза, миләүшә, йәсмин сәскәләре һалырға ярай.

### Дисбактериоз

Эсәктең микрофлораһын яҡшыртыу өсөн халыҡ медицинаһы сәй бәшмәгенән әҙерләнгән эсемлек тәҡдим итә. Уны 4-5 көн тотҡандан һуң, дауалау сифатына эйә була. Сәй бәшмәген әҙерләү: 1 литр һыуға 1 ҡалаҡ сәй иҫәбенән сығып, сәй бешерергә, 1 литр һыуға 100-120 грамм шәкәр һалырға, һыуытырға һәм сәй бәшмәген һалырға. 4-5 көндән (эҫе көндә 2-3 көн) һөҙөп, һыуытҡыста һаҡларға.

✓ **Әгәр сәйәсмәндәр "Рәсәй Федерацияһы" тигән дәүләттең аяҡта ныҡлы баҫып тороуын теләй икән, мәктәптә уҡытылған Рәсәй тарихын тик урыҫ тарихы рәүешендә генә түгел, ә Рәсәй халыҡтары тарихы булараҡ уҡытырға кәрәк.**



## УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

### Егерменсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Яҡшылыҡ ҡылыу. "Урал батыр" эпосында яҡшылыҡ тураһында бик матур яҙылған. Шул юлдарҙы күмәкләп бергә уҡып, иҫтә ҡалдырырға тырышыу - үҙе үк яҡшылыҡ булыр. Башҡорт халҡының яҡты донъяла йәшәү маҡсаты бирелгән был эпоста: яҡшылыҡ ҡылыу, үҙеңдән һуң яҡшы исем ҡалдырыу. Балаға бәләкәйҙән ошо маҡсат һалына барған. Шуның өсөн яҡшылыҡ тураһында мәҡәлдәр ҙә, йырҙар ҙа бик күп. Әкиәттәрҙә лә һәр ваҡыт Яҡшылыҡ еңә. Башҡорт халыҡ әкиәт геройҙары бер ваҡытта ла хәйлә, алдау, юхалау, ике йөҙләнеү аша еңмәй, һәр ваҡыт батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, күңеле тулы матур тойғолар йөрөтөүе һәм фәҡәт яҡшылыҡ ҡына уйлауы менән ауырлыҡтарҙы еңеп сыға һәм халыҡ батырына әйләнә, аҙаҡ ил батшаһы булып китә. Ил батшаһы булғас та фәҡәт халҡын ғына хәстәрләп йәшәй. Халыҡ мәҡәлдәрен файҙаланып, әңгәмә ҡороу ҙа яҡшы. Мәҫәлән, "Яҡшылыҡ эшләү яҡшылыҡ күреүҙән яҡшыраҡ, тигәндә нисек аңлайһығыҙ?" тип, уйландырып алыу һәйбәт. Ислам динендә ошо уҡ фекер ҡыҙыл һыҙыҡ булып бара. Тик ул дини күҙлектән аңлатыла.

### Егерменсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Дини ритуалдар, йолалар, хөрәфәттәр. "Башҡорт халҡында бөгөнгә көнгәсә һаҡланып ҡалған ниндәй йолалар бар?" тип, дәресте балаларҙың үҙҙәре белгән йолаларҙан, уйын төрҙәренән башлау теманы яҡшыраҡ аңлауҙа ыңғай һөҙөмтә бирер. Тәбиғәткә сығып уйындар ҡороуҙың, йолалар башҡарыуҙың әһәмиәте ниҙә? Мәҫәлән, "Ҡарға бутҡаһы" йолаһын башҡарғанда ни өсөн ҡоштарҙы һыйлайҙар? Шулай уҡ һынамыштар, юрауҙар, тыйыуҙар - бөтөнөһө лә илебеҙ сәйәсәтендә дин тыйылғанға тиклем булған гөрөф-ғәҙәттәр. Уларҙың күбеһе мәжүсилек осоронан ҡалған. Халыҡ хәтере үҙенә яҡын йолаларҙы онотмай. Бөгөн иһә уларҙың барыһы ла яңынан тергеҙелә, кире ҡайтарыла. Күптәр диндең ҡайтарылыуын ихлас ҡабул итә. Дин менән шаярырға ярамай. Ышанаһың икән - бөтөн шарттарҙы ла, дини бурыстарҙы ла үтә. Ышанмайһың икән - ҡыланма. Диндар кешегә иманлы булыу төп шарт. Иман - ул үҙ намыҫың алдында яуаплылыҡ. Ике йөҙлө булырға ярамай.

### Егерменсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Башҡорт халҡында алтын урталыҡты сама тигән һүҙ менән атайҙар. Сама белеү, самалы эшләү, самалы һөйләү, самаһын белеп алыу һәм башҡалар. Самаһыҙлыҡтың да самаһы бар. Сама белгән сайҡалмаҫ. Уҫал булһаң - аҫырҙар, йыуаш булһаң - баҫырҙар, сама белһәң - ил ағаһы яһарҙар. Ошо мәҡәлдәргә аңлатма биргәндән һуң, дәреслектәге материал буйынса әҙәплелек тураһында һөйләшкәндә, уҡыусы аңына яҡшыраҡ һеңер. Сөнки халҡыбыҙ борон-борондан ошондай мәҡәлдәргә таянып һабаҡ бирә килгән һәм өлкәндәр әле лә ҡуллана уларҙы. Уҡыусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрендәге ҡытыршылыҡтарҙы миҫалға килтереп, анализ бирергә кәрәк. Тик исемдәрен атамай, фәҡәт ваҡиғаны ғына миҫалға килтереү отошло булыр. Сөнки һабаҡ биреү өсөн шәхсән кеше түгел, ә ул ҡатнашҡан ваҡиға мөһим. Уҡыусының үҙ тормошонан, үҙенә яҡын билдәле ваҡиғанан сығып һөйләшеү иҫтә ныҡыраҡ ҡала, тик ул әңгәмә асыулы, ярһыулы һәм насар эҙемтәләргә килтерерлек бәхәс булмаһын. Сама белеү бындай осраҡта ла файҙалы. Халыҡ тәнҡит өсөн бик үҙенсәлекле ысул һайлаған: йә ул өсөнсө заттан һөйләгән, йә, киреһенсә, бөтөн кире күренештәрҙе үҙ исеменән бәйән иткән. Әле лә ошондай ысул менән тәнҡитләү осраҡтары бар. Тыңлаусыларҙың береһе лә һүҙҙең үҙе тураһында бармағанлығын яҡшы аңлай, әммә һөйләүсе бик ҡыҙыҡлы, отошло ысулы менән әйтеһе фекерен ослап ҡуя ала.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

## БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

**Евразия ҡитғаһында башҡорттар иң боронғо халыҡтарҙың береһе. Тарихты сәйәсәт менән бутамаған, уны гәҙел өйрәнгән һәр профессиональ тарихсы быны күрә һәм билдәләп китә. Бик боронғо дәүерҙәрҙән беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып килеп еткән халҡыбыҙҙың яҙмышы ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс, аяныслы ла.**



# САМАУЫР ТУЛАНЫҠЫМЫ...

## әллә Ҡытайҙыҡымы?

Нимә генә күрмәгән ул. Рәсәйгә ҡушылғандан алып урыҫ алып барған бер яу, һуғыш-талаш башҡортһоҙ үтмәгән. Беҙ быны әле әҙмәҙ булһа ла беләбеҙ. Әммә беҙҙең халыҡтың Рәсәй тарихына индергән өлөшө тик һуғыш менән генә сикләнмәй. Рәсәй тигеҙлектәренән күсенеп килгән тау күрмәгән урыҫтарҙы Уралдың таулы райондарында хужалыҡ итеү ысулдарына беҙҙең халыҡ өйрәтә. Әлбиттә, ул үҙе лә урыҫтан ниҙер өйрәнә, нимәләрҙелер отоп алып, үҙ хужалығында ҡуллана. Был бөтә донъяла шулай. Халыҡтар бер-береһенән бер туҡтауһыҙ өйрәнәләр. Мәҫәлән, хәҙер бөтә донъяға таралған картуф, кукуруз, помидорҙы халыҡтар Америка индеецтарынан үҙләштергән икәне билдәле.

Халыҡтарҙың бер-береһенән өйрәнеүенең һөҙөмтәһенә бер ҡыҙыҡ, әммә бигүк билдәле булмаған бер миҫал. Беҙ бөтәбеҙ ҙә "Урыҫ самауыры" һанап йөрөгән сәй ҡайнатыу ҡорамалының Рәсәйҙә таралып китеүе башҡорттар менән бәйле икәнен күбебеҙ белмәйҙер ҙә. Хатта башына ла индереп сығармайҙыр. Ә был ысынлап та шулай. Рәсәйҙәге беренсе самауырҙы Уралда, ғәйнә башҡорттары ерҙәрендә төҙөлгән Ирген заводында, ә аҙаҡтан Соҡсон заводында эшләй башлайҙар.

Ә эш былай була. Урал заводтарының хужаһы В.Н.Татищев Ирген заводы эшселәренән махсус артель төҙөй, ә был артелдекеләр үҙҙәренә бол туплау маҡсатында урындағы халыҡтың - башҡорттарҙың мал-мөлкәтен талау менән шөғөлләнә. Ошондай бер талау ваҡытында урыҫ эшселәренең ҡулына быға тиклем улар ғүмерҙә күрмәгән ҙур ҡорһаҡлы сәйер бер ҡорамал килеп эләгә. Был башҡорттарҙың һыу ҡайнатыу ҡорамалы була.

Ирген заводы приказчигы Родион Набатов тигән берәү был ҡорамалды күпләп етештереүҙе ойоштора. Шулай итеп, беҙ хәҙер бөтәбеҙ ҙә "урыҫ самауыры" тип белгән сәй ҡайнатыу ҡорамалы бөтөн Рәсәйгә таралып китә. Аҙаҡ Невьянск заводы хужалары Демидовтар Набатовты төрлө ташламалар менән әүрәтеп, үҙҙәренә эшкә саҡыралар һәм Набатов самауырҙы Демидовтарҙың Соҡсон заводында эшләй башлай. Демидовтар Тула ҡалаһы кешеләре була. Улар менән самауыр Тулаға барып эләгә. Хәҙер инде самауырҙы Тулала күпләп эшләй башлайҙар һәм хәҙер бөтә донъяға таралған "Тула самауырҙары" барлыҡҡа килә.

Шулай итеп, "урыҫ самауыры" тигән ҡорамалдың донъяға таралыуына ла башҡорттар сәбәпсе булып сыға. Ҙур ҡорһағында "Ирген заводы. 1741 йыл" тигән яҙыулы самауыр иң боронғо Рәсәй самауыры һанала. Ә был самауыр башҡорттарға Ҡытайҙан килеп эләккән була. Рәсәйҙә күпләп етештерелә башлағандан һуң ҙа әле, сауҙа йәки икенсе берәй донъя мәшәҡәттәре менән барып сыҡҡандарында башҡорттар самауырҙы Ҡытайҙан, Ирандан алып ҡайтыр булған. Самауырҙы урыҫтарға тиклем күпкә алдараҡ шулай уҡ Иранда ла эшләгәндәр. Был турала беҙҙең көндәргә килеп еткән тарихи сығанаҡтарҙа мәғлүмәттәр һаҡланған. Ҡытай, Иран самауырҙарының көнсығыш халыҡтарына ғына хас оригиналь формалары ылыҡтырғандыр алыҫ ерҙән самауыр ташырға. Билдәле ҡурайсы Юлай Ғәйнетдиновтың олатаһы тураһында һөйләгән бер мәғлүмәте иғтибарға лайыҡ. Уның атабабаларының 19-сы быуатта йәшәгән береһе - Ниғмәтулла Саньяров Ҡытайға йөрөгән һәм унан ике еҙ самауыр алып ҡайтҡан булған. Хатта Ҡытайҙан бер ҡыҙ алып ҡайтып, мулла саҡыртып уға Шөкөрбикә тигән исем ҡуштырып, кәләш итеп алып, теттереп донъя көтөп ятҡан ул үҙ заманында. Тимәк, беҙҙең халыҡ элек-электән Ҡытай, Иран менән сауҙа итеп, унан төрлө тауар, шул иҫәптән самауырҙар ҙа ташыуы бер ҙә аптырарлыҡ, булмаҫ хәл түгел. Тик шуныһы үкенесле: был һыу ҡайнатыу ҡорамалын башҡорттар нисек атаны икән? Бәлки, ул "баҡырса" тип аталғандыр? Минең тыуған яҡтарымда сәйнүкте, ниндәй материалдан эшләнеүенә ҡарамаҫтан, "баҡырса" ти торғайнылар, сөнки улар элек баҡырҙан, еҙҙән яһалғандар. Самауырҙың да сәйнүк кеүек үк шул уҡ һыу ҡайнатыу ҡорамалы икәнен иҫтә тотҡанда, баҡырса тип аталыуы бик тә ихтимал. Әммә был тик фараз ғына.

Мине башҡорттоң тарихын ҡабартып күрһәтергә тырышыуҙа, йәиһә бүтән берәй хилафлыҡта ғәйепләргә маташыусылар булыуы ла бар. Шуға күрә, шикләнеүселәр өсөн был мәғлүмәттең ҡайҙан алынғанлығын да яҙып китеү кәрәктер, тип уйлайым. Был мәғлүмәттәр Алексей Иванов тигән авторҙың Мәскәүҙә донъя күргән "Увидеть руский бунт" тигән китабының 186-187-се биттәрендә баҫылған. Ә мин иһә, гәзит уҡыусыларға был факттар ҡыҙыҡ булыр, тигән уйҙан "Киске Өфө"гә ошо мәҡәләмде тәҡдим иттем. Беҙ үҙебеҙҙең халыҡтың Рәсәй дәүләтендәге ролен яҡшы белергә тейешбеҙ. Был беҙгә үҙебеҙҙең лайыҡлы урыныбыҙҙы белеп, ныҡ баҫып, кешеләр менән аяҡ терәп һөйләшергә мөмкинлек бирәсәк. Үҙ халҡының тарихын белгән кеше теләһә ниндәй сетерекле мәлдә лә юғалып ҡалмаҫ, үҙен һәм халҡын яҡлай алыр. Рәсәй тик урыҫ халҡы көсө менән генә төҙәлмәгән. Хәҙер "Рәсәй Федерацияһы" тигән донъяға билдәле оло дәүләтте төҙөүҙә Рәсәйҙең эреле-ваҡлы халыҡтарының бөтәһе лә көсөнән килгәнсе өлөш индергән.

Мин Баймаҡ ҡалаһының 1-се урта мәктәбен беренсе кластан унынсыны бөткәнсе башҡортса уҡып сыҡтым. Хәтеремдә, үткән быуаттың 60-сы йылдарында башҡорт мәктәптәре өсөн сығарылған "Рус әҙәбиәте" тигән китапта граждандар һуғышы ваҡытында Петроградты Юденичтан яҡларға барған башҡорт һалдаттарының бөйөк рус яҙыусыһы Пушкиндың Михайловскийҙағы урыҫ крәҫтиәндәре тарафынан талап, емерелеп, туҙҙырылған музейын йүнәтеп, ипкә һалып китеүҙәре тураһында мәғлүмәт була торғайны. Был факт хәҙер программанан нишләптер алып ташланған. Был, бәлки, ҡапыл ҡарағанда бәләкәй генә, иғтибарға бигүк лайыҡ булмаған факт кеүек күренәләр. Әммә был бәләкәй генә факт беҙҙең халыҡ улдарының, уйлап ҡараһаң, ябай ауыл малайҙарының ниндәй юғары мәҙәниәтле булыуының бер сағыу күрһәткесе бит. Әйткәндәй, ошондай бәләкәй генә факттарҙан төҙәлмәйме икән күп милләтле оло Рәсәйҙең тарихы? Әгәр сәйәсмәндәр "Рәсәй Федерацияһы" тигән дәүләттең аяҡта ныҡлы баҫып тороуын теләй икән, мәктәптә уҡытылған Рәсәй тарихын тик урыҫ тарихы рәүешендә генә түгел, ә Рәсәй халыҡтары тарихы булараҡ уҡытырға кәрәк, тип уйлайым. Тарихты белһәк, "Минең халҡым ғына Рәсәй дәүләтен төҙөгән" тигән мин-минлек сиренән арынырбыҙ. Бер-беребеҙҙе тиң күреп, ихтирам итергә өйрәнербеҙ. Сөнки кешеләре берен-бере ихтирам итмәгән, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә әхләҡһеҙлек хөкөм һөргән дәүләт тарих арбаһынан төшөп ҡалып, юҡҡа сыға. Быға миҫалдар тарихта бихисап. Боронғо Рим империяһы тарихын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. "Урыҫ" самауыры тарихы шундай уйҙар тыуҙырҙы, йәмәғәт.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре.**

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

# БАШҠАЛАРҘЫ ЯНДЫРЫУ ӨСӨН...

## үҙеңә янырға кәрәк



**Был һүҙҙәрҙе, нигеҙҙә, уҡытыусылар үҙҙәренә девиз итеп алырға ярата. Сөнки уларға балалар менән эшләргә, үҙҙәренең күңелендәге усаҡтан балалар күңеленә осҡон һалырға кәрәк. Диҡҡәт Бураҡаевтың тормошон да, асылын да тап ошо уҡытыусы, мәғрифәтсе сифаты менән билдәләргә, унын ҡыҫҡа ғүмер юлын башҡаларға юл күрһәтеп, ваҡытынан алда һүнгән сыраҡ менән дә сағыштырырға мөмкин. Замандаштары, дуҫтары, таныштары унын тураһында фекерҙәре менән бүлешкәндә бынын тап шулай булыуына инанаһың да. Рәшит Шәкүр: "Геолог Диҡҡәт Бураҡаев йәне-тәне менән ысын халыҡ улы һәм саф күңелле тәбиғәт балаһы ине. Унын йөрәгендә тулы мәғәнәһендә халыҡ рухы йәшәр ине. Ул башҡорт халҡының иң яҡшы сифаттарын - күңел киңлеген, аҡыл һәм тойғо нәфислеген, тәрбиәлелекте һәм рухи ҙурлыҡты бер үҙендә туплаған кеше ине", - тип юҡҡа ғына яҙмаған. Ысынлап та, Диҡҡәт Бураҡаевтың яҡты образы уны шәхсән белгән кешеләр өсөн һаман да янып, юл күрһәтеп тороусы маяҡ...**

**Нияз МӘЖИТОВ, академик:** Беҙ Диҡҡәт менән интернатташтар булдыҡ. Мин - 9-сы, ул 8-се синыфҡа бер йылда килдек. Интернатты көмөш миҙалға тамамлап, Диҡҡәт артабан Мәскәү дәүләт университетының Геология факультетында белем алыуын дауам итте. Студент йылдарында бер-нисә тапҡыр Мәскәүгә командировкаға барып, уның менән осрашып, хәл-әхүәлдәр һорашып, алдағы тормош пландары менән уртаҡлаша торғайныҡ.Вуз тамамлап ҡайтҡас, ул - БФА-ның Геология институтында, мин Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәрҙәр булдыҡ. Тормоштоң бик күп тармаҡтары буйынса фекерҙәребеҙ тап килде. Башҡорт халҡының йәшәү шарттарын яҡшыртыу, тарихын, әҙәбиәтен үҫтереү тураһында фекер алыша инек һәм һәр ваҡыт уртаҡ тел таба торғайныҡ. Мин ҡайһы бер яҙған мәҡәләләрем буйынса уның менән кәңәшләшә инем. Сөнки ул шул тиклем абруйлы, шул тиклем белемле, төрлө яҡлап үҫешкән шәхес булды. Тәнкитте лә асыҡ итеп еткерә белде.

Ғаиләләр менән дуҫлаштыҡ. Балаларыбыҙ бергә үҫте. Шуға мин Диҡҡәттең балаларын яҡшы беләм, ошо көнгә тиклем уларҙың яҙмышы менән ҡыҙыҡһынып йәшәйем. Быйыл БДУ-ның тарих факультетында беренсе курста бер студент имтихан тапшыра. Зачет кенәгәһен алдым да, ҡарайым: Бураҡаев. Һораша башланым. Бактиһәң, Илгизәрҙең улы, Диҡҡәттең ейәне икән. Ғөмүмән, Бураҡаевтар менән яҙмыш гел шулай үрелеп бара.

Диҡҡәт иң китерлек алдынғы фекерле, түҙемле, тормошҡа үҙ фекере, үҙ ҡарашы булған шәхес ине. Бәлки, шулай янып-көйөп йәшәгән өсөн дә ваҡытынан алдараҡ баҡыйлыҡҡа күскәндер ҙә. Бик үкенесле. Беҙҙең Башҡортостаныбыҙ, халҡыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, фәнебеҙ өсөн ул бик күп яңы асыштар яһарға тейеш ине.

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ, шағир, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:** Диҡҡәт Бураҡаев - замандаштары өсөн эталон булды: кешелекле, эскерһеҙ, асыҡ, иҫ киткес талант эйәһе ине. Башҡорт ире, башҡорт ир-егете нисек булырға тейеш, тип һораһалар, Диҡҡәт Бураҡаев һымаҡ, тип әйтер инем. Уның әле атап киткән сифаттары магнит һымаҡ кешеләрҙе үҙенә тартып торҙо, эргәһендә һәр ваҡыт бөтөн зыялылар йыйылыр ине. Әлбиттә, бындай тартыу көсө тамырҙарынан, ата-бабаларынан килгәндер, тип уйлайым.

Ул белгес буларак та, геолог буларак та бик төплө ине. Шул уҡ ваҡытта ул ысын мәғәнәһендә рәссам-яҙыусы ла булды. Шул сифаттары һәр ваҡыт минең күҙ алдында һәм күңел түрендә һаҡлана. Тоғро булды, милләт өсөн ысын йөрәктән янды. Ниндәйҙер мәкер тураһында уй башына ла килә торған кеше түгел ине. Тормош тәжрибәһе менән ихлас уртаҡлашты, кешегә һуңғы тинен сығарып бирергә әҙер булды. Тормошта ундай кешеләр күп булмай. Мәсәлән, талантлы кешеләр бар, әммә кешелек сифаттары әллә ни маҡтарлыҡ түгел. Диҡҡәттә кешелек сифаттары ла, талант та - барыһы ла бергә тупланғайны. Ул һаман да йылмайып, тормошта бер маяҡ, эталон булып, күҙ алдында тора.

**Рәшит ШӘКҮР, яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:** Армияла хеҙмәт иткән ваҡытта һәр саҡ "Совет Башҡортостаны" гәзитен яҙҙырып ала торғайным. Шул ваҡытта Диҡҡәт Бураҡаев синыфынан кемдең ҡайҙа артабан уҡырға барыуы тураһында яҙып сығарҙылар. Уны Мәскәү дәүләт университетына бара тип яҙҙылар. Армиянан ҡайтҡас, уның менән аралашып йөрөй башланым. Шул ваҡыттан ул минең бик яҡын, дуҫ кешемә әйләнде. Диҡҡәт Бураҡаев бик әҙерлекле ине, яҡшы белем алды. Мәскәү дәүләт университетын тамамлағас, аспирантурала ҡалырға ла мөмкинлеге була, ләкин ул тиҙерәк Башҡортостанға ҡайтып, республикабыҙға, халҡыбыҙға файҙа килтереп йәшәү ынтылышы менән яна. Мин уның МДУ-ла аспирантурала ҡалып, бер ыңғай фән кандидаты булып ҡайтмауына үкенеп тә ҡуям. Өфөлә уның кандидатлыҡ эше лә оҙаҡҡа һуҙыла, тормош проблемалары килеп тыуа, һәр хәлдә, күп нәмәләргә ҙур ҡыйынлыҡтар аша өлгәшергә тура килә. Ғөмүмән, тормош юлында ауырлыҡтар күп осраны, ләкин ул көслө рухлы булып ҡалды. Уның рухы милләт кимәлендәге рух булды: ул шул тиклем халҡыбыҙҙы яратты, халҡыбыҙҙы, уның тарихын, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен яҡшы белә торғайны. Ул картотека төҙөнө. Унда геологияға ҡағылған сығанаҡтар, материалдар буйынса белешмә, икенсе картотекала башҡорт халҡының тарихына, рухи донъяһына ҡағылған сығанаҡтар, төрлө мәғлүмәттәр һаҡланды. Ул Башҡортостан тарихын төптән, тәрәндән аңлап белгән кеше булды. Тарихты, халыҡ тарихын да төрлө китаптар уҡып белергә мөмкин. Ләкин Диҡҡәт ағай уны бик нескә, тәрәндән аңлаған кеше ине. Был ата-бабанан килгән хәтер аша бирелгән уға. Ҡартатаһы 1905 йылғы рус-япон һуғышында ҡатнашҡан, олпат, абруйлы, руссаға ла оҫта, төрки-башҡорт яҙмаһына ла маһир була. Шундай мөхиттә тәрбиә алып, төпкөлдән, тәрәндән, халыҡ араһынан сыҡҡан ысын халыҡ вәкиле ине ул. Шул яҡтан күҙ алдына бик ҙур фигура булып килеп баҫа. Уның төп ҡиммәте, асылы - халыҡсанлыҡта. Ысын халыҡ улы, халыҡ балаһы, халыҡ вәкиле. Ҡайҙа ғына барһа ла, Диҡҡәт ағайға ҡарап, башҡорт шундай була, тип әйтерлек кеше, шундай ҙур шәхес һәм төплө белемле ғалим ине ул. Уның ғалимлығы менән патриотлығының ҡиммәте тағы ла нимәлә: ул ошо геология, ер, ерҙе белеү өлкәһендәге белемен халыҡты тәрбиәләү, халыҡҡа аң-белем биреү өсөн ҡулланды. Геология тураһындағы бынамын тигән башҡортса китаптар яҙҙы. Бына шундай күп яҡлы, тәрән рухлы шәхес ине ул.

**Земфира ЙӘНТҮРИНА**
**яҙып алды.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Шөғөлдәре һәм йәшәү рәүеше

Башҡорттарҙың күсмә көнкүреше тураһындағы күҙаллауҙар саманан арттырылып ебәрелгән. Хатта XVIII быуат башында бары тик Себер һәм Нуғай даруғаларының башҡорттары ғына ярым күсмә тормош алып бара, Ҡаҙан даруғаһы башҡорттарының яртыһы ғына ҡуналҡаға (йәйләүгә йәки ҡышлауға) сыҡҡан, Уса даруғаһы башҡорттары тулыһынса ултыраҡ тормош алып барған.

Йәйләүгә башҡорттар, нигеҙҙә, апрель һуңында, май башында сыҡҡан һәм урынға бәйле сентябрь йәки октябрь һуңына тиклем шунда булғандар. Йәй дауамында һәр ғаилә йәйләү урынын өс йәки дүрт тапҡыр алыштырған. Ғәҙәттә, ҡышҡылыҡҡа ҡышлау тирәһендә үләнде һаҡлап ҡалдырыу маҡсатынан йәйләүҙе мөмкин тиклем ауылдан алыҫтараҡ урынлаштырғандар. Һуңынан инде ауылдар һәм йәйләү урындары араһы яйлап ҡыҫҡара барған. Әгәр XVIII быуат һуңында йәйләүҙәр ҡышлау урынынан 100 саҡырым алыҫлыҡта булһа, XIX бауыт аҙағында - XX быуат башында, аҫаба ерҙәр күләме кәмеү һөҙөмтәһендә, бары тик ҡайһы бер ергә байыраҡ ерыуҙар ғына 30-50 саҡырым алыҫлыҡта йәйләү мөмкинлегенә эйә булған. Ер эшкәртеү үҫеш алғас, яландарҙы көтөүлектәрҙән айырыу мохтажлығы тыуған һәм был баҫыуҙар (көтөү йөрөгән ерҙәр кәртәләп алынған) барлыҡҡа килеүенә сәбәп булған.

Тәүҙә көндөҙ һауырға алып ҡайтылған мал төн сыҡҡансы хатта баҫыуҙарҙың 6-8 саҡырымда булған сигенә барып та етә алмаған. Шуға күрә, уның алыҫтағы сигендә үлән матур үҫкән, ә яҡындағыһын мал ашап бөткән. Элек йәйләү булған ерҙәр һөрөлгәс, башҡорттар йәйҙең икенсе яртыһында ауыл баҫыуының алыҫтағы майҙанына күсенгән, уңыш йыйып алынғас, баҫыу сиктәренә сыҡҡан.

# Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттар тәүҙә болғарҙарға һәм татар-монголдарға, һуңынан Мәскәү дәүләтенә түләгән яһаҡ, нигеҙҙә тиренән торған. Болғарҙар хакимлыҡ иткән замандa һыуһар тиреһе тәңкәләрҙе алмаштырған, ә Мәскәү хакимлығы осоронда һәм унан һуңыраҡ, XVIII быуатта, яһаҡ һыуһар тиреһе менән иҫәпләнгән (бер тире 4 гривна торған).

Кәсепселек хайуандары тип ҡондоҙ, ҡама, һыуһар, төлкө, бүре, һеләүһен, кеш, аҫ, шәшке, йәтсә, тейен, осра тейен, ҡуян, йомран һаналған. Шулай уҡ айыуҙарға, мышыларға, ҡыр кәзәләренә һунар иткәндәр.

Боронғо һунар ысулдары тураһында беҙ бик аҙ беләбеҙ. Иң иртә мәғлүмәттәр XVIII быуатҡа, аныҡлап әйткәндә, уның икенсе яртыһына ҡарай. Һуңғы мәғлүмәттәр Башҡортостанда һунарсылыҡ бөтөү алдында торған ваҡытта тупланған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Интернетта башҡорт телендәге, башҡорт халыҡ тураһындағы мәғлүмәттәрҙең күберәк булыуын теләйем. Шуның өсөн дә мин Башҡорт Википедияһы эшмәкәрлегенә ҡушылдым.***

# БАШҠОРТ

ВикипедиЯ

*Ирекле энциклопедия*

**Былтыр "Киске Өфө" гәзите биттәрендә интернеттағы башҡорт Википедияһы тураһында бер нисә тапҡыр һөйләшеү уҙғарылғайны. Мәғлүмәт биреүҙе дауам итәбеҙ. Белеүегеҙсә, Википедия - асыҡ эстәлекле интернет энциклопедияһы, уның мәғлүмәтен һәр кем бушлай ҡуллана һәм ирекле рәүештә тарата ала. Мәғлүмәт сығанағын эстәлек менән байытыу ҙа бушлай эшләнә һәм һәр кеше уны тулыландырыу, камиллаштырыу мөмкинлегенә эйә. Википедияла мәғлүмәтте һәр бер халыҡтың туған телендә яҙып була. Донъя күләмендә тупланған барлыҡ ғилем, барлыҡ мәғлүмәт һәр кешенең туған телендә ирекле ҡулланыуҙа булырға тейеш, тип иҫәпләй Википедия ирекмәндәре. Википедия әлеге көндә донъя халыҡтарының 285 телендә алып барыла. Уны төҙөүҙә 38 миллион теркәлгән һәм иҫәпһеҙ теркәлмәгән ирекмән ҡатнаша. Бөтә тел бүлектәрендә 24 миллиондан ашыу мәҡәлә бар.**

Википедияның башҡорт бүлегендә "Башҡортостан" исемле беренсе мәҡәлә 2005 йылдың 16 апрелендә яҙылған. Шул ваҡыттан алып ете меңдән ашыу ҡатнашыусы теркәлгән, 2012 йылда ай һайын уртаса 50-гә яҡын ҡатнашыусы яңы мәғлүмәт өҫтәгән. Декабрь айында Википедияның башҡорт бүлегенә 750 166 тапҡыр инеп, мәҡәлә уҡығандар. 2013 йыл башына 25 меңдән ашыу мәҡәлә яҙылған.

2012 йыл Башҡорт Википедияһы өсөн уңышлы осор булды. Донъя күләмендә киң танылыу тапҡан интернет энциклопедияһының башҡорт телендәге бүлеге лә үҙенең үҫеш стратегияһын билдәләне. Һуңғы йылда мәҡәләләр һаны һәм уларҙы тулыландырыу күрһәткесенең әүҙем үҫеше күҙәтелә. Ике йыл элек, 2010 йылдың декабрендә, бүлектә ни бары 1000 мәҡәлә иҫәпләнә ине. Әммә 2011 йылдың йәйендә урыҫ, ҡаҙаҡ һәм немец телдәрендә эш алып барған хеҙмәттәштәре ярҙамында башҡорт википедиясылары махсус программалар ҡулланып, "мәҡәлә ҡойоу" ысулын үҙләштерҙе һәм шул йылдың 10 сентябрендә мәҡәләләр һаны 5 меңгә етте. 2012 йылдың ғинуарында 10 һәм 15 меңлек сикте үтеү ресурсҡа киң йәмәғәтселек иғтибарын йәлеп итте. Ә инде 30 октябрҙә 20 меңенсе, 20 декабрҙә 25 меңенсе мәҡәлә яҙылды.

2012 йыл дауамында бүлектә бик күп яңы ҡатнашыусылар теркәлде, улар араһынан 25 кеше әүҙемдәр исемлеген 69 берәмеккә еткерҙе. Һуңғы айҙа ниндәйҙер эшмәкәрлек күрһәткән, теркәлгән ваҡытынан ун һәм ундан күберәк төҙәтеү индергән кешеләр әүҙем тип иҫәпләнә һәм был иҫәп тәртибе бөтә тел бүлектәрендә бер төрлө. Бүлектәрҙең күләме мәҡәлә яҙыусылар һанына тура бәйле икәне билдәле. Былтыр декабрҙә инглиз телендә - 790935, француз телендә - 83046, япон телендә - 68 919, урыҫ телендә - 55525, төрөк телендә - 12 399, әҙербайжан телендә - 1210, ҡаҙаҡ телендә - 643, үзбәк телендә - 133, татар телендә - 120, саха телендә 82 кеше әүҙем ҡатнашыусы булып иҫәпләнгән.

Башҡорт Википедияһында яңы ҡатнашыусылар менән аралашып, уларҙың фекерҙәрен "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары иғтибарына еткермәксе булдыҡ:

**Ilacin, йәки Ринат Шархиев, Мәскәү ҡалаһынан. Башлыса яңы мәҡәләләр яҙа. 2012 йылда теркәлгән ҡатнашыусылар араһында, 26 көн эсендә, төҙәтеүҙәр һаны буйынса беренсе урынға сыҡты:**

- Балаҡатай районы Ямаш ауылында тыуғанмын. Ете йәшкә тиклем Ҡурғаш ауылында йәшәнек. Беренсе кластан Өфө ҡалаһында 20-се башҡорт ҡала гимназияһында уҡыным, 9-сы кластан 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында белем алдым. Барыбер ҙә башҡорт телен урыҫ теле аша өйрәнергә тура килде. Университетта уҡығанда башҡортса-урыҫса, урыҫса-башҡортса һүҙлектәрҙе яҙ ятланым. Уларҙың иң ҙуры 20 мең һүҙҙән тора ине. 2000 йылда БДУ-ла тарих факультетын тамамланым. Һуңғы ваҡытта Мәскәүҙә сканер операторы булып эшләйем. Википедияны уҡырға яратам, сөнки унда мәғлүмәт күп. Унда мәҡәләләр яҙыу минә ҙур ҡәнәғәтлек бирә. Башҡорттарыма нимә әйтергә теләйем, шуны яҙам. Күп һүҙҙәргә үҙем аңлатма бирәм. Минең фекерләүемсә, Башҡорт Википедияһында белемле, илһөйәр кешеләр яҙыша.



## Уның эстәлеген кемдәр



**Ләйсән, Сибай ҡалаһынан. 2012 йылдың декабрь айында "Һайланган" дәрәжәһе алған, "Лимон" исемле мәҡәләне тәржемә итеүсе:**

- Минең исемем Ләйсән. Сибай ҡалаһынанмын. Иртән яраткан эшемә юлланам, ә кис, яраткан шөғөләмде һағынып, өйөмә йүгереп ҡайтам. Шөғөләм - тәржемә итеү.

"Бәйләнештә" социаль селтәрендә Павел Дуровтың Википедияға ярҙам итеүе тураһында уҡыным. Бынан алда ла ниндәйҙер мәғлүмәт эҙләгәндә Википедияға юлыға торғайным. Унда тел бүлектәре, бигерәк тә башҡорт теле бүлеге барлығын күҙ алдыма ла килтермәй инем.

Ноябрь байрамдарында "Бәйләнештә" селтәрендә башҡорт төркөмдәрен ҡараштырып ултырғанда бер төркөмдә Рөстәм Нурыевтың ярҙам һорап яҙған хәбәрен күреп ҡалдым. Бер нисә минут уйлағас, ярҙамымды тәҡдим иттем һәм шунда уҡ яуап алдым. Мин Википедия тураһында ысынында бер нәмә лә белмәй инем. Минә ентекле итеп аңлата башланылар һәм мин ундағы эшмәкәрлегемде еңеләнән - мөхәррирләүҙән - башлап киттем. Бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс эште ял көндәренән һуң да дауам иттем. Мәҡәлә яҙыуға йәки тәржемә итеүгә өндәһәләр ҙә, баҙнат итмәнем, сөнки быға тиклем Word-та ғына эшләнем. Әммә браузерҙарҙа автоматик тәржемәселәр (Гугл тәржемәсе ҡоралы) эште еңеләйтте. Тәржемә итеп бөткән тексты Википедия мәҡәләһе форматына күсереү мөмкинлеге бар. Тәржемә итеү өсөн электрон китаптар, һүҙлектәр менән ҡулландым.

Мәктәптә үк башҡорт теле, мәҙәниәтенә һөйөү, ғорурлыҡ хисе тәрбиәләнгәйне миндә. Был тәрбиәлә атай-әсәйемдең, ҡартатай-ҡәртәсәйемдәрҙең, уҡытыусыларымдың өлөшө ҙур. Маҡсатлы, тормошта үҙ юлын табып, алға ҡарап йәшәүсе кешеләр менән һөкланам. Интернетта башҡорт телендәге, башҡорт халыҡ тураһындағы мәғлүмәттәрҙең күберәк булыуын теләйем. Шуның өсөн дә мин Башҡорт Википедияһы эшмәкәрлегенә ҡушылдым. Был эш минә бик оҡшай. Бик күп файҙалы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәт менән танышам. Халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре, мәҙәниәте, сәнғәте тураһында ҡыҙыҡһынам. Туған телемә булған һөйөүем, ғорурлығым тағы артты. Хәҙер Википедияның яратып - Вики тип, ә башҡорт теле бүлеген - БашВики тип атайым.



**Гүзәл Ситдиҡова, яҙыусы, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, Өфө ҡалаһынан. Башҡорт телле интернет проекттарҙың Ағинәйе. Башҡорт телендә Википедия, Викикитапхана, Викиһүҙлек, Викиөҙөмтә төҙөүсе:**

- Википедияға килеп инеүем компьютер төшөнсәләрен башҡортсаға тәржемә итеүҙән башланды. Шунда күреп ҡалып, егеттәр мине интернет донъяһындағы энциклопедияны эшләүҙә ҡатнашырға саҡырҙы. Үҙ алдыма байтаҡ нәмәгә өйрәнергә тура килде, бигерәк тә Вячеслав Чернев күпте аңлатты, рәхмәт уға. Башта һүҙлектәр эшләү менән мауығып киттем, "Монголса-башҡортса һүҙлек" менән бер рәттән, Төрөксә-башҡортсаһын да башланым. Викикитапхана бүлеге барлыҡҡа килгәс, унда төрлө әҫәрҙәр урынлаштырҙым. Ваҡыты-ваҡыты менән Викиөҙөмтәләргә "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре" бүлеген дә тулыландырып торам. Бигерәк тә Википедияла мәҡәләләр эшләү оҡшай. Уларҙы әҙерләгәндә үҙем өсөн көтөлмәгән асыштар эшләп, шаҡ ҡатҡан саҡтар ҙа була. Мәҫәлән, сыр тураһындағы мәҡәлә яҙғанда күҙләнсек сырҙары (сычужный) әҙерләүҙә 10 көнө лә тулмаған быҙауҙарҙан алынған фермент файҙаланыуҙары тураһындағы хәбәр тетрәндерҙе.

Мәҡәләләр әҙерләгәндә мөмкин тиклем республика-

**2012 йылдың 30 декабренә башҡорт теле бүлегендә яңы ҡатнашыусыларҙан 10 әүҙемдәр исемлеге**

| № п/п | Ҡатнашыусы | Эшмәкәрлек | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | Дөйөм исемлектә билгән урыны | | Мәҡәлә төҙәтеү | | Беренсе төҙәтеү | |
| | | иҫәп көнөнә | Δ | бөтәһе | һуңғы 30 көндә | беренсе төҙәтеү көнө | нисә көн элек |
| 1 | Ilacin | 11 | ... | 258 | 258 | Дек 04, 2012 | 26 |
| 2 | Ләйсән | 16 | 2 | 109 | 47 | Ноя 04, 2012 | 56 |
| 3 | Гүзәл Ситдиҡова | 22 | 14 | 57 | 35 | Мар 07, 2012 | 298 |
| 4 | Ayratayrat | 26 | ... | 44 | 44 | Дек 30, 2012 | |
| 5 | Ryanag | 36 | 56 | 28 | 22 | Июн 19, 2012 | 194 |
| 6 | Айнур | 38 | 2 | 25 | 5 | Ноя 22, 2012 | 38 |
| 7 | Fail Khasay | 41 | 52 | 24 | 18 | Окт 06, 2012 | 85 |
| 8 | Neek02 | 49 | ... | 18 | 18 | Дек 05, 2012 | 25 |
| 9 | Marat-avgust | 53 | 7 | 15 | 4 | Янв 30, 2012 | 335 |
| 10 | Анзалита | 59 | 144 | 13 | 11 | Ноя 03, 2012 | 57 |

***✓ Тик ирекле мәғлүмәт таратыу проекттары нигеҙендә әле мин ер шарының икенсе башындағы башҡа милләт кешеһе менән аралашам, ҡыуанысымдан күңелем тулыша. Белем беҙҙе шулай туғанлаштыра, берләштерә.***

# ВИКИПЕДИЯҺЫ

## тулыландыра?

быҙға, милләтебеҙгә бәйле мәғлүмәттәргә мөрәжәғәт итергә тырышам. Мәҫәлән, "Йөҙөм" тигән мәҡәләне әҙерләгәндә был нәҙәкәтле үҫемлекте беҙҙә, Башҡортостанда, 110 йыл әүәл үк үҫтерә башлағандарын яҙҙым. Һүҙ араһына ауыҙ-тел ижады өлгөләрен дә ҡыҫтырып ебәрәм. Шулай уҡ сит илдәрҙән ингән һүҙҙәрҙә телебеҙҙең фонетик мөмкинлектәрен тулыһынса файҙаланырға кәрәк, тип инанам. Ни өсөн әле беҙ Һамбургты - Гамбург, Һиллариҙы - Хиллари тип яҙырға тейешбеҙ? Мәҫәлән, Гонконг ҡалаһы тураһында мәҡәлә яҙа башлағас, уның инглиз хәрефтәре менән Һоңкоң тип яҙылғанына иғтибар иттем. Һәм башҡорт телен, шулай уҡ ҡытай иероглифтарын белгән япон егете Ютонан (беҙ уның менән хәбәрләшеп торабыҙ) һүҙҙең яңғырашын белештем. Ул ысынлап та иероглифтарҙың Һоңкоң тип яҙыуға тура килеүен расланы.

Тағы шул: махсуслашҡан тармаҡ һүҙлектәре етешмәүе бәкәлгә һуға, мәҫәлән "Тура эсәк" тураһында мәҡәлә әҙерләгәндә, "Восходящая ободочная кишка" тигәнде нисек тәржемә итергә, тип, кис буйы баш ватырға тура килде. "Виноградная лоза" тигәне лә баш ҡатырмалы. Нисек тәржемә иткәнде белгегеҙ килһә, Википедияны асып ҡарарһығыҙ, тип көтәм. Бик тә бик мауыҡтырғыс донъя ул - Википедия!



**Boltwatts, йәки Юто Һишияма, Токио ҡалаһынан. Япония сит ил телдәре университетының төрки телдәре бүлеге талибы (башҡорт телендәге хәбәрҙе үҙаллы яҙҙы):**

- Минең исемем Юто. 1990 йылдың 10 авгусында Японияның баш ҡалаһы Токиола донъяға килгәнмен. Тыуған телем - япон теле. Инглиз, төрөк, татар һәм башҡорт телдәрен уртаса кимәлдә беләм. Ҡайһы ваҡытта Башҡорт Википедияһын уҡыйым. Мин унда ҡулланыусы битендә теркәлдем, үҙем тураһында яҙҙым. Тиҙҙән яңы мәҡәлә яҙа башларға уйлайым. Тик Википедияға яҙыу минең өсөн бер аҙ ауырыраҡ әле.



**Neek02, йәки Рәсүл, Нефтеюганск ҡалаһынан. Яңы ҡатнашыусыларҙан әүҙемдәр исемлегенә инеүсе:**

- Тыуған көнөм - 9 август 1991 йыл. Сығышым менән Башҡортостан Республикаһының Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылынан. 2005 йылдан башлап ғаиләм менән Нефтеюганск ҡалаһында йәшәйем. Төмән нефть һәм газ дәүләт университетында уҡыйым. Әлегә магистр дәрәжәһенең 1-се курсындамын. "Ҡыҙыл" дипломға өмөт бар.

Икенсе төбәккә йәшәргә күскәс, туған телдә өйҙә генә һөйләшеү иң ауыры булды. Башҡортостанда йәшәгәндә кешеләр менән көн дә туған телеңдә аралашаһың: йә мәктәптә, йә магазинда, йә күршеләр менән. Сит-ят ерҙә туған телдең ҡәҙере ныҡыраҡ беленә икән. Ярай әле, интернет бар, яратып Башҡортостан юлдаш телевидениеһын ҡарайбыҙ, "Юлдаш", "Ашҡаҙар" радиоһын тыңлайбыҙ, "Киске Өфө" гәзитен уҡыйбыҙ. Мин башҡортса йырҙарҙы йыш тыңлай башланым, туған телдә үткән төрлө концерттарға мотлаҡ йөрөйөм. Башҡорт телендә ҙур ғына йырҙар йыйынтығым бар. Берәй яңы йыр ишетеп ҡалһам, интернет буйлап тиҙ генә эҙләп алып, өйрәнә һалам.

Шуны әйтергә кәрәк, беҙ йәшәгән төбәктә башҡорттар, татарҙар байтаҡ. Ләкин телде өлкән йәштәгеләр генә белә һәм аралаша, ә йәштәрҙең ҡайһылары аңлай, ләкин һөйләшмәй, ә күбеһе бөтөнләй телде белмәй. Шуның өсөн интернетта башҡорт телендә төрлө-төрлө мәғлүмәт сығанағы булыуы бик мөһим. Башҡорт телендәге Википедияны осратып бик ҡыуандым, ә унда мин Гуглда "Башҡорттар" һүҙен эҙләгәндә барып сыҡтым. Баҙнат итеп, Википедияла яҙышырға өйрәнә башланым, "Автомобиль" исемле мәҡәлә тәржемә итеп ҡараным. Ул мәҡәлә минән һуң үҙгәртеп, яҡшыраҡ итеп яҙылды. Техник терминдарҙы башҡортса белмәүем эште ҡатмарлаштыра. "Башҡорт теленең машина фонды" исемле сайттағы "Урыҫса-башҡортса һүҙлек" менән ҡулландым. Әммә унда ҡайһы бер һүҙҙәрҙе тапманым һәм сайт та бик әкрен эшләй. Серверҙың көсө етмәй, ахыры, "йоҡлай" ҙа китә. Техника, нефть һәм газ тармағы төшөнсәләренең башҡортса һүҙлектәре бармы икән? Тәбиғәт байлығы булған нефть-газ торбаларына "атланған" олигарх ағайҙар башҡортса һүҙлектәр төҙөүсе ғалимә апайҙарға әҙерәк-күберәк аҡса бирһә, бәлки, ундай һүҙлектәр интернетта булыр, ә серверҙар "йоҡламаҫ" ине.

Минең артабан Википедияла яҙышыу теләгем ҙур. Өфөләге БашАрт фирмаһынан "Башҡортса ВикипедиЯ яҙам" тигән футболка һоратып алдым.

***Шуны әйтергә кәрәк, беҙ йәшәгән төбәктә башҡорттар, татарҙар байтаҡ. Ләкин телде өлкән йәштәгеләр генә белә һәм аралаша, ә йәштәрҙең ҡайһылары аңлай, ләкин һөйләшмәй, ә күбеһе бөтөнләй телде белмәй. Шуның өсөн интернетта башҡорт телендә төрлө-төрлө мәғлүмәт сығанағы булыуы бик мөһим. Башҡорт телендәге Википедияны осратып бик ҡыуандым, ә унда мин Гуглда "Башҡорттар" һүҙен эҙләгәндә барып сыҡтым. Баҙнат итеп, Википедияла яҙышырға өйрәнә башланым, "Автомобиль" исемле мәҡәлә тәржемә итеп ҡараным. Ул мәҡәлә минән һуң үҙгәртеп, яҡшыраҡ итеп яҙылды. Техник терминдарҙы башҡортса белмәүем эште ҡатмарлаштыра. "Башҡорт теленең машина фонды" исемле сайттағы "Урыҫса-башҡортса һүҙлек" менән ҡулландым. Минең артабан Википедияла яҙышыу теләгем ҙур. Өфөләге БашАрт фирмаһынан "Башҡортса ВикипедиЯ яҙам" тигән футболка һоратып алдым.***



**Archaeodontosaurus, йәки Дидье Дескуэн (Didier Descouens), Тулуз ҡалаһынан (Франция). Википедия мәҡәләләренә фоторәсемдәр ҡуйыусы (француз теленән Гугл тәржемәсе аша хәбәр итә):**

- Мин врач һәм тәбиғи фәндәр ғалимымын. 1957 йылда Тулуз ҡалаһында тыуғанмын, әле лә шунда йәшәйем. Ҡолаҡ ауырыуҙары буйынса белгес булып эшләйем. Палеоантропология буйынса ғилми эҙләнеүҙәр менән шөғөлләнәм. Википроекттар менән өс йыл мауығам. Ирекле мәғлүмәт таратыу сиктәрендә Тулуз музейы менән хеҙмәттәшлек итәм. Мин Феб (Light) исемле проект әҙерләнем. Был проект буйынса Тулуз музейы коллекцияһын фотоға төшөрҙөк һәм ирекле ҡулланыуҙа булған COMMONS исемле видео, аудио, фотофайлдар йыйынтығына һалдыҡ. Бөтәһе 1671 фоторәсем. Шул фоторәсемдәрҙе 330 википроектҡа урынлаштырыу буйынса әүҙем эшләйбеҙ, шул иҫәпкә былтыр башҡорт Википедияһын да ҡуштыҡ. Әлеге ваҡытҡа донъялағы бөтә проекттарҙың 115421 викимәҡәләһендә беҙҙең фоторәсемдәр урынлаштырылған. 2012 йылдың декабрь айында беҙҙең фотография ҡуйылған мәҡәләләрҙе 2 409500 тапҡыр уҡынылар. Ғинуар айы һуңында Тулуз ҡалаһының Халыҡ университетында Феб проекты өлгөһөндә ирекле мәғлүмәт таратыу тәжрибәһен уртаҡлашыу буйынса конференция үткәрәм.

Ғилем донъя халыҡтарының дөйөм байлығы, ул беҙҙең уртаҡ телебеҙ. Төрлө милләттәрҙе ысынында берләштереүсе нигеҙ. Ғилем ирекле һәм бушлай таратылырға тейеш. Барлыҡ кешеләр үҙ көсөн йәлләмәй, шуға ынтылһын ине, сөнки был замананың иң алдынғы ҡарашы. Тик ирекле мәғлүмәт таратыу проекттары нигеҙендә әле мин ер шарының икенсе башындағы башҡа милләт кешеһе менән аралашам, ҡыуанысымдан күңелем тулыша. Белем беҙҙе шулай туғанлаштыра, берләштерә.

Башҡорт халҡына шуны әйткем килгәйне: "Әле бөгөн иртән һеҙҙең барлыкты, Башҡортостан Республикаһы барлығын белмәй инем. Әммә һеҙҙең барлыкты белмәйенсә, дөйөм Феб проекты нигеҙендә, Башҡорт Википедияһы өсөн эшләгәнмен булып сыҡты. Һәм һеҙҙең минең эшемдә күреп баһалауығыҙ, бәйләнешкә сығыуығыҙ, викиэшмәкәрлегем тураһында башҡорт гәзитендә хәбәр итергә теләүегеҙ минең өсөн бер ниндәй байлыҡҡа алыштырғыһыҙ оло бүләк булды. Рәхмәт".



**Halan Tel, йәки Николай Павлов, медицина фәндәре кандидаты, Якутск ҡалаһынан. Саха Википедияһы хакимы:**

- Ҡәҙерле башҡорт дуҫтар! Саха Википедияһында ҡатнашыусылар исеменән ҡайнар сәләм! Беҙҙән бик йыш "Википедия нимәгә кәрәк?" тип һорайҙар. Яуабы ябай ғына һымаҡ: "Кешеләргә уларҙың туған телендә мәғлүмәт биреү өсөн." Әммә бындай яуап Википедияның әһәмиәтен тулыһынса асып бөтмәй. Беҙҙең уйыбыҙса, Википедия туған телдәребеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу өсөн бик тә кәрәк. Саха һәм башҡорт теленә әлеге ваҡытта донъяла киң таралған телдәр тарафынан ҡаты баҫым яһала. Шуның өсөн беҙҙең йәштәребеҙ үҙ телен ихтирам итһен, ҡәҙерен белһен, телде өйрәнһен өсөн компьютер технологияларында, интернетта туған телдәрҙе ҡулланыу мөмкинселектәре киң булырға тейеш. Ҡәҙерле дуҫтар, Башҡорт Википедияһын яҙығыҙ, уны мәғлүмәтле һәм ышанычлы итеп төҙөгөҙ. Был изге эштә һеҙгә ижади уңыштар теләйем.

**Рөстәм НУРЫЕВ
әҙерләне.**

✓ **- Һине көттөм бит мин, һылыуым! Килдеңме? Бына хәҙер үлһәм дә була. Әле төш күреп ятам, имеш, һинең менән икәүләп Ғәзимә туғайында мәтрүшкә йыябыҙ. Хуш еҫтәре бөтә яланға таралған.**






- Кино миңә ныҡ оҡшаны, ағай! Рәхмәт!

- Сахалинға каникулында барһаҡ, нисек булыр?

- Ағай, әсәйем аҡса таба алмаһа?

- Уныһы өсөн борсолма! Иң мөһиме - һине ебәреүе кәрәк бит әле.

- Ебәрер ул, ул минең теләгемә ҡаршы килә алмаҫ.

Сирек тамамланды. Каникул да үтте. Тик ағайым юҡ та юҡ. Бары тик февраль урталарында ғына унан хат алдым. Ҡырғыҙстандан яҙған. Уны һис көтмәгәндә шунда эшкә күсергәндәр, хатта миңә хәбәр итергә лә мөмкинлеге булмаған. Йәл... Шулай булыр тип уйлағайным да инде... Берәй нәмәне гел уйлаһаң, килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Инде оноттом тиһәң, ул хыялың ҡаршыңа үҙе йүгерә! Ә мин был хаҡта һис оноталмайым, әйтерһең, теләгем миңә тамыр йәйгән ҡарт ағас.

Башта ағайымдың хаттарына яуап яҙманым. Аҙаҡ ауыр булһа ла минең өсөн генә эшенән һорап ҡайтып китергә ниәтләүен хәбәр иткәс, унайһыҙ булып китте. Нисек уҡыу йылын тамамларға йыйыныуым, йәйге пландарым хаҡында оҙон итеп хат яҙып һалдым. Ул, күрәһең, ныҡ ҡыуанған. Яуап хатында ручка эҙҙәре (күҙ йәшенәндер тип аңланым) таралып-таралып киткән урындар бар ине. Илағыраҡ шул ағайым.

Ҡырғыҙстанға ағайым оҙаҡҡа китте, ахырыһы. Башта хатлашып торһаҡ та, аҙаҡ аралар тағы өҙөлдө. Уның эше лә күп булғандыр, бәлки, ғаиләһе лә барҙыр, тип уйланым. Етмәһә, бер үк нәмәләр хаҡында хат яҙыу мине ялҡытты. Мин уға яуап яҙмай башланым. Бер йыл эсендә ул да туҡтаны.

Университетҡа уҡырға ингән йыл ине. Вахтала һине көтәләр, тип төнгә сәғәт берҙә комендант уятып, ишек шаҡыны. Әсәйемә берәй хәл булдымы икән әллә, тип хафаландым. Йүгереп төшһәм, ерән сәсле ағайым баҫып тора. Уға барып һырылам. Ул йонсоған, йоҡламаған да кеүек.

- Сахалиндан ҡайтышлай һине күрмәй китмәйем, тинем ...

- Сахалиндан? Атайға ни булған?

- Диңгеҙҙә... шторм ваҡытында... дүрт балыҡсы...

Мин иҙәнгә сүкәйеп үк ултырам. Ғүмерҙә лә осраша алмаҫ кеүек инек, ысынлап та, шулай булды ла ҡуйҙы.

- Кәүҙәһен таптылармы һуң?

-Тапҡандар, ерләп ҡайтып киләм. Һин белергә тейешһең, тип хәбәр итмәй булдыра алманым. Үҙеңде лә бик күрге килгәйне. Әсәйеңә оҡшап киткәнһең... Күҙҙәрең, сәстәрең атайыңдыҡы!

- Ә ниңә Сахалинға барғанда уҡ өндәшмәнең?

- Шулай тип һорарыңды белдем инде мин һинең. Шуға башта Өфөгә осорға, шунан Сахалинға юлланырбыҙ, тип уйлағайным. Мин уйлағанса килеп сыҡманы... Барып еткәнсе ерләгәйнеләр инде. Мин "Өфө-Ташкент" поезы менән кире юлланам. Ял итеп, йыуынып та алыр кәрәк юлға тиклем, поезд таң менән. Аҡса етәме студентҡа Өфөлә? - Ағайым кесәһенә ҡулын тыға.

- Һин хәҙер үк китергә тиһеңме? Ҡалдырма мине ошо хәбәрең менән яңғыҙымды. Дәрескә өлгөрөрмөн әле, көт, һинең менән мин дә сығам.

- Ҡайҙа бараһың? Мин бит ҡунаҡханала туҡтаным...

- Мин дә шунда барып торам һин юлға сыҡҡансы. Дәрестәр туғыҙҙа ғына башлана...

Ағайым арыған, әммә йыуынып алғандан һуң һөйләшер көс тапты. Ул мине тағы ла таң ҡалдырып, мәтрүшкәле сәй яһап эсерҙе.

* * *

Ошо осрашыуыбыҙ һуңғыһы булды тиер инем, юҡ, икән. Бер мәл унан хат килеүҙән туҡтаны. Тағы ла яңы эшкә күскәндер ҙә, барып урынлашҡас, хәбәр итер, тип көтәм, тик юҡ. Мин университетты тамамлап, кейәүгә сыҡтым, йырсы булам, тип йөрөгән еремдән, тележурналист булып киттем. Үҙемә лә ҡыҙыҡ тойола хатта.

Атайымдың ауылынан бер егет телевидениеға практика үтергә килде. Унан ипләп кенә ағайым тураһында һорашам. Башта ул иҫенә төшөрә алмай аптыраны, ни тиһәң дә ауылдары ҙур бит, өс йөҙ йортҡа ашыу. Аҙаҡ һүҙҙән кем тураһында барғанлығын аңлап ҡалды, ахыры.

- Ә, Рамаҙан ағаймы? Ул бит ни... Ҡырғыҙстанда фабрикала эшләгәндә бәләгә тарыған. Хәҙер ҡайҙалыр Себерҙә төрмәлә ултыра шикелле.

Тимәк, был хәбәр дөрөҫ! Өсөнсө кешенең яңылышыуы мөмкин түгел. Нимә генә булды икән? Уны-быны уйлап торманым, ауыл хакимиәтенә шылтыратып, ҡайҙа ултырыуы хаҡында, адресын һорашам. Ярты сәғәт тә үтмәне, минең ҡулда ағайым хаҡында кәрәкле мәғлүмәт ята ине. Башта хаттар яҙҙым, яуап юҡ. Посылкалар һалдым, ярар, улар кире килмәй. Әллә үҙе алды, әллә шунда кәрәк тип табыусылар ҡулланды... Йыйынып ҡына сығып китер инем, ирем асыулана. "Себер урманында нимә юғалттың? Үлгең киләме? Ҡарарға теләмәгәс, ни тип балалар таптың?"

Шулай йәшәп ятҡанда, бына һиңә "мә", имеш, мине Себерҙән кемдер эҙләй.

- Әсәй, әсәй, ҡарәле, һине эҙләүсе ҡыҙҙың исеме лә Миләүшә,- ти ҡыҙым.

Был ул, тик Рамаҙан ағайым ғына! Ноутбукҡа текәләм. 12 йәштәр тирәһендәге мөләйем генә баланың йөҙө сағыла.

- Нимә тип яҙғандар һуң?

- Бына, уҡы!

Балам хатты асып уҡ бирә.

"Дорогая Миляуша, здравствуйте! Пишет вам жена вашего брата Антонина. Нашли вас через страницу дочери Миляуши, кстати, названной в вашу честь. Ваш брат в тяжелом состоянии. Не знаю, дождется ли он Вас? Приезжайте, он все время о вас только и говорил. Связь с родственниками он потерял. Раньше сестры писали, сейчас и они перестали. Да и он сам не хотел ни с кем поддерживать отношения. Приезжайте, он ждет вас!.."

Тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Эштән ҡайтып етмәгән иремә Омскиға самолетҡа билет алырға ҡушам. Өйҙә тегеләй-былай үрһәләнеп йүгергеләй башлайым. Улым менән ҡыҙым бар ни аңламайынса, мине тынысландырырға тырыша. Ул арала ирем дә ҡайтып инә. Күрәһең, үтенесемде шаяртыу тип ҡабул иткән.

- Һин нимә, ахырызаманды Себерҙә ҡаршыларға булдыңмы әллә? - тип йылмая. Мин уға өҙөк-йыртыҡ хәбәр һөйләйем, үҙем илайым, башым сатнап ауыртыуын һиҙмәҫтән тоя башлайым. Мин ванна бүлмәһенә инеп китәм. Өйҙәгеләр минһеҙ генә ултырып киске аш ашай. Балаларым ярар, аңламаны ла ти, ә бына Рәшит ниңә улай ҡылана? Минең эсемдә буран ҡупҡандай. "Ағайым мине көтөп ята!" 21 декабрҙә Өфөнән ауылға таябыҙ, тип пландар ҡорған мин тап 20-һенә Омскиға осорға йыйынам, имеш. Ирем башта өгөтләп, матур итеп һөйләшеп ҡарай, аҙаҡ әрләй, һуҡрана башлай. Мине иҫәрҙән, алйоттан һалдыра. Өйҙән сығып китәм, ти. Мин бер ни ишетмәйем. Бары тик Омскиға барырға тейешмен, тип ҡабатлауҙы беләм. Ахыр сиктә ул минең ҡулға мул ғына аҡса килтереп тоттора һәм билет кассаһына алып бара. Мин иртәгә үк, эйе, иртәгә үк уның янында булырға тейеш! Ул бит миңә бала саҡта рухи терәк булды. Мин уны ташлай алмайым.

Самолетҡа ултырғанда ирем күҙемә лә ҡарамай. Ғәфү итмәҫтәй итеп үпкәләгән кеүек. Ҡулымда йыйнаҡ сумканан башҡа бер нәмә лә юҡ. Бынан нимә алдым? Бал да, мәтрүшкә. Иң мөһиме - аҡса кәрәк булыуы бар. Бүләк ителгән алтындарымды таҡып та, теләһә ҡайҙа тығып та үҙем менән һалып алам.

Омскиҙан Звездный ҡасабаһына барып етеүе лә еңелдән булып сыҡманы. Башта район үҙәгенә, аҙаҡ ҡасабаға такси тоторға тура килде. Транспорт ни сәбәптәндер йүнләп эшләмәй, бөтәһе ахырызаман хаҡында һөйләй.

Кинйәголовтарҙың йортон тиҙ таптылар. Килеп төшкәс, күҙем ышанмай тора. Ҙур ҡарағай йорт!

Бында мине көтөп торғандар. Барып еткәндә, ағайым телдән яҙғайны инде, еңгә тейешле Антонина бик алсаҡ ҡатын булып сыҡты. Балалары ихлас күрешә. Миләүшәһен нимәһе менәндер үҙемә оҡшатам, бәлки, исемдәр бер үк булғанғалыр. Нимә тип һүҙ башларға белмәй торғанда, Антонина үҙе әүҙемлек күрһәтә.

- Ирекҡә сыҡҡас, кире тыуған яғына ҡайтырға теләмәне шул. Туғандары тәүҙә саҡырып хат яҙҙылар, аҙаҡ улар ҙа өнһөҙ ҡалды. Мин ағайыңдан һигеҙ йәшкә өлкәнерәк, бәлки, шуға ла тиңһенмәгәндер инде. Йәшәп тик яттыҡ инде. Эшкә егәрле ине, мыҡты кәүҙәле, күптәр әйтмешләй, сибәр ир, ниңә бала тапмаҫҡа, ти. Минең тәүге иремдән ике балам бар, улар өлкәндәр инде, үҙаллы йәшәйҙәр. Рамаҙанды яраттым мин, тик ул Ҡырғыҙстанда законлы ҡатыны ҡалғас, никахҡа ла инмәне. Һуңғы йылдарҙы бигерәк йыш эсте. Хәйер, хәҙер кем эсмәй инде. Күргәнһеңдер, ана, ниндәй йорт һалды бит. Хан һарайы кеүек. Ошо тыҡрыҡ ҡына ағас өйҙәрҙән тора. "Упрямый переулок" тип йөрөтә халыҡ беҙҙең яҡты. Бында күберәге башҡорт-татар йорттары!

Бына һиңә- мә! Был ҡасабаға ниңә тупланды икән беҙҙең халыҡ, тигән уй мейене телеп үтә. Антонина үҙе өҫтәл тирәһен ҡарай, үҙе яйлап ҡына хәбәрен һүтеп йөрөй.

- Зыяратты ла ике өлөшкә бүлделәр - теге яғында мосолмандар ята. Ағайымдың да аҫыл һөйәккәйе, атайҙыҡы һымаҡ, сит ерҙә ятып ҡына ҡала инде...Эй, Аллам!.. Юҡ, юҡ, алып ҡайтыу мөмкинлегем юҡ, бынау ахырызаман тип ҡаңғырмаһалар, бәлки, мөмкин дә булыр ине... Әсенеүем йөҙөмә сыҡмай.

-Юҡҡа бошонма, бик өҙгөләнеп ҡайтаһы килгән саҡтарында ла ҡайтманы бит...Әллә нимәнән тартынды...Урманға сығыр ҙа китер, сығыр ҙа китер ине. Теге тишекле торбағыҙ нимә тип атала әле?

Мин аптырап китәм. Нишләп тишекле торба булһын ул? Хәйер, белмәгән кешегә шулай тойолалыр инде. "Ҡурай!"тим, Антонина һүҙ йомғағын тағатыуын белә.

- Ана шуны эҙләп, урман ҡыҙырып күп йөрөнө. Үҙе әйтә ҡурай Уралда ғына үҫә инде ул , тип, үҙе эҙләй. Шунан табып алып ҡайтты бит был бер көндө бер көпшә. Шунан көй сығарып маташты әле... О, Боже... Әллә ниҙәр ҡыланды инде... Өндәшмәнем, зарығып һағыныуын тоя инем. Ни тип әйтәһең инде...

Ҡатын һөйләй, ә минең йөрәгем теленеп-теленеп киткән кеүек була. Ҡуй инде, аяҡтары атлаған саҡта ниңә ҡайтманы, исмаһам, хәбәр итмәне икән... Үрһәләнеүемдең сиге юҡ!

Мин дә кустәнәстәремде өҫтәлгә ҡуям. Антонина мәтрүшкәне шунда уҡ танып ҡала.

- А это, наверняка, матрешка! - ти ул, үҙҙәренсә "душица" тип тә әйтмәй. - Ағайың был үләнде эҙләп, урманда күп ҡыҙырҙы, таба алманы. Берәүҙәргә тыуған яҡтарынан алып та килгәйнеләр, оҡшатманы, тәме икенсе, тине. Күрәһең, һәр кемдең үҙ урманы, үҙ үләне.

Беҙ мәтрүшкә еҫе таратып, сәй эсергә генә ултырғанда, эске бүлмәнән тауыш ишетелде:

- Миләүшә, Миләүшә!

- Дочку зовет? - тип һораған кеше булһам да, ағайымдың мине саҡырыуын тойҙом мин. Ул зәңгәрһыу күҙҙәрен аса биргән, йәштәре бите буйлап тәгәрәй. Ҡоштай осоп барып инеп, ҡулдарынан тотам.

- Һине көттөм бит мин, һылыуым! Килдеңме? Бына хәҙер үлһәм дә була. Әле төш күреп ятам, имеш, һинең менән икәүләп Ғәзимә туғайында мәтрүшкә йыябыҙ. Хуш еҫтәре бөтә яланға таралған. Шунда уҡ усаҡ яҡтыҡ та, сәй ҡайнатырға булып киттек.

Ағайым һөйләй, ә мин күҙ йәштәремә ирек бирәм. Рәхәт күрҙеме икән ошо кеше донъяла, тип уйлайым.

- Сәй эсә генә башлағайныҡ... Ишетәһеңме мине, Миләүшә?

-Эйе, ишетәм, ағай, ишетәм!

- Сәй эсә генә башлағайныҡ, атайың килеп сыҡты ла бесәндәргә алып ҡайтырға кәрәк, ямғыр килә, тип мине үҙе артынан эйәртте.

Ул арала Антонина ағайыма сәй килтерә. Үҙе үҙҙәренсә әллә ниҙәр уҡына, ара-тирә сүкынып та ала. Телдән яҙған кешенең телгә килеүен ул ғәжәп тә итте төҫлө.

Ә миңә бөтәһе лә аңлашыла. Ағайым мине генә көтөп ятҡан. Минең йөҙҙә ул бөтәһе менән дә: тыуған яғы, туғандары, туған ере, хатта теле, мәтрүшкә яландары менән дә хушлашты.

- Ғүмер буйы мәтрүшкә сәйҙәрен яратһам да, бәхетте ситтән, аҡсалы ерҙәрҙә эҙләнем. Тапманым түгел, таптым да кеүек бәхетле минуттарҙы. Әммә иң оло бәхет - ғәзиз ереңдә яҡындарың менән бергә ғүмер итеүҙә икән! Рәхмәт, һылыуым, килгәнһең! Бәхил бул! Миләүшәне ташлама! Теге ике өлкәне ҡырҙа уҡыйҙар инде, ә бына был ҡыҙыҡай бәләкәй әле, ни бары 11 йәш. Башҡортостанға ҡайтам тиһә, зинһар, ситкә типмә. Мин уның менән гел башҡортса һөйләштем, телде аңлай ул. Әсәләре лә тиҫкәре кеше түгел, ҡаршы булмаҫ. Ҡана тағы бер мәтрүшкә сәйен йотоп ҡарайым әле...

Аҙаҡ инде ағайымдың ни һөйләгәнен дә аңламаным. Таңға табан ул ниндәйҙер ҡәнәғәт йылмайыу менән мәңгелек йортона күсеп тә китте...

* * *

Ҡайтып китер алдынан Антонина миңә бер төргәк тотторҙо: өйөндә уҡырһың әле, ағайыңдың хаттары, тине ул. Йөрәк түҙәме ни инде - самолетҡа инеп ултырыу менән ҡәҙерле ҡағыҙҙарҙы ҡулыма алдым.

"Миләүшә, һылыуым, һин, моғайын, аптырай торғанһыңдыр: миңә әле был ағайым миңә һәйбәт мөнәсәбәт күрһәтә, тип. Йәш сағымда әсәйеңә ғашиҡ инем..." Бына һиңә - мә! Ғүмерҙә ишеткән хәбәрем түгел...Хәйер, уның мине үтә лә ныҡ яҡын күреүе ғәжәпләндерә ине, әммә ул тойғо алыҫ бала саҡта ҡалған. "Ағайым әсәйең менән йөрөй башлағас, үтә лә ныҡ ҡыҙғандым, әммә ни эшләй ала инем инде үсмер килеш? Әсәйең беҙҙең күршеләргә ҡунаҡҡа килгәндә күреп ҡалғайным, уның һылыулығына таң ҡалырлыҡ ине шул! Яратыу хисе мине һис ҡасан да ташламаны, шуға ла мин һине үҙ балам кеүек күрҙем. "Ағайымдың үтенесен кире ҡаҡмай Звездныйға барыуыма, һуңғы юлға оҙатырға ҡалыуыма тағы бер тапҡыр эстән генә ҡыуанам. Моғайын, иртәме-һуңмы был хаттар мине юллап табыр ине, ана шул саҡ көҙгөнән үҙүҙемә ҡарай алыр инемме?! Белмәйем...

Икенсе хатты ҡулға алыу менән күҙ алдарым ҡараңғыланып китә... "Миләүшә, һылыуым, бына инде нисәнсе тапҡыр мин һиңә үҙем хаҡында дөрөҫөн яҙырға теләйем, әммә булдыра алмайым. Үҙемдең көсһөҙлөгөмдө еңә алмайым. Мин сит илдә хеҙмәт итмәнем, ә Дағстанда үтте әрме йылдары. Ана шунан ҡайтып килгәндә тарыным да инде бәләгә. Ҡәҙерле һеңлекәшем минең, дөрөҫ аңла, хатта үҙем теләп тә түгел, әммә миңә енәйәт юлына баҫырға тура килде..." Енәйәт юлына? Нисек? Нишләп? Әле генә мин ҡәҙерләп иҫкә алған ағайым - енәйәтсе? Күҙ йәштәремә төйөлөп, артабан уҡыйым: "Һинең янға интернатҡа килгәндә мин үҙемде шул тиклем бәхетле тойҙом, сөнки һин сафлыҡтың, ихласлыҡтың үҙе инең! Үҙем һине ҡосаҡлайым, үҙем эстән һыҙып торам. Ошо тиклем әшәкелектәр эшләгән ҡулым менән һине яратырға хоҡуғым бармы икән?.. Беҙ бит ҡорал менән һатыу иттек..." Башым әйләнеп, "Остановите, пожалуйста, я выйду, мне плохо!" тип әйткәнемде генә хәтерләйем... Әсе нашатыр еҫе мине уята. Янымда стюардесса менән табип ултыра. Улар хәлемде һораша, ниндәйҙер төймәләрҙе йоторға ҡушып итә.

- Һеҙ беренсе тапҡыр шундай хәлгә тарынығыҙмы, әллә гелән шулаймы? Самолетта осҡанығыҙ бармы?

Уларға яуап бирергә теләгем генә түгел, хәлем дә юҡ...Һуңғы ярты сәғәт эсендә булған ваҡиғалар минең менән түгел, ниндәйҙер кинола барған төҫлө. Ҡулымда, әйтерһең, ҡағыҙҙар түгел, утлы таштар күтәргәнмен. Миңә һауа етмәй, тағы ла бер һулыш һәм йәнә аңымды юғалтырмын һымаҡ. Йә, Хоҙайым, нимә булды һуң был? Мәтрүшкә сәскәһе төҫлө нескә күңелле ағайым торғаны кедр сәтләүеге булып сыҡты түгелме һуң?!

Күрәм, төргәктә тағы ла бер хат бар, әммә уны асырға батырсылығым етмәй. Тағы нимәләр беләһем бар икән? Быныһын инде йөрәк күтәрә алмаҫ кеүек. Омск менән Өфө араһы ла бит Мәскәү менән Өфө араһы түгел, самолет, әйтерһең, Йыһан киңлегендә аҙашҡан да, ҡайҙа төшөрөн белмәй, осоп тик йөрөй.

Һуңғы хатты ҡулға алам. Нисек кенә булһа ла, әле уҡығандарымдан да аяныслыһы булмаҫ, моғайын. Хәйер, нимә булһа ла, был минең өсөн яҡын кешенең яҙмалары...

"Миләүшә һылыуым, нисек хәлдәрең? Беләм, һин мине йәнә юғалттың, әммә һинең яҙмышыңды ҡурҡыныс аҫтына ҡуймаҫ өсөн ҡайҙалығымды хәбәр итмәй торорға булдым. Эйе, әле Башҡортостанда ҙур үҙгәрештәр бара. Телеүҙәкте яулағандар, башҡорттар үҙаллылыҡ талап итә, тигән хәбәрҙәр Себер диуарҙарына ла килеп етте. Һин дә митингтарҙа иң алғы сафта йөрөйһеңдер кеүек. Ә бына мин бында, һалҡын зинданда, эстән сереп ятҡан төҫләмөн. Бик үкенесле, әлбиттә, тик бер ни эшләй алмайым. Их, минең көсөм, мөмкинлектәрем нисек кәрәк булыр ине бөгөн үҙ еремдә. Бала сағыбыҙҙа атайың менән ололарҙың бороңғо башҡорт батырҙары тураһында һөйләгәнен тыңлағанда, халҡыбыҙға тик яҡшылыҡ эшләрбеҙ, тип хыяллана инек. Ә яҙмыш, ана нисек икән, атайыңдың ваҡытынан алда ер ҡуйынына, ә мине төрмәгә тыҡты...

Сараһыҙмын, күрәһең, һәр азатлыҡ өсөн түләргә кәрәк, тигән ысынбарлыҡ мине тап әлеге мәлдә сикле итеп, һуңғы аҡтыҡ көсөмдө һурып алмаҡсы. Тап ошондай көрәш йылдарында үҙ ереңдән ситтә тороп ҡалыу мине бик аяуһыҙ хәлгә ҡуйҙы, ҡабат тыуған еремде ҡайтып күрә алырлыҡ аҡлау таба алманым. Бары тик һине күрәм , тип кенә юлланмаһам, хәйер, быға ла хоҡуҡлымы һуң әле мин?! Кисер миңе, ғәзиз һылыуым, кисер!"

Мин үкһеп илай башлайым... Эй, Хоҙайым, анау хәтлем һынауҙар, ағайым йөрәгенә йомоп йөрөтөп, нисек түҙҙе икән барыһына?!. Мин Звездныйҙа иң ҡәҙерле нәмәмде ҡалдырып ҡайтып барған төҫлө тоям үҙемде. Исмаһам, һөйләшер кеше лә юҡ бит. Янда ултырған ҡатын миңә шикле ҡарап ала. Әммә өндәшмәй. Стюардесса йүгереп килеп етә, мин ни сәбәптәндер йылмайырға тырышып: "Да все нормально!"тигән булам. Үҙем ашығыпашығып күҙ йәштәремде һөртәм. Тиҙерәк, тиҙерәк ҡайтып етергә!

* * *

Өйҙән сығып китеү менән янаған тынғыһыҙ иремдең яратам мин өҙгөләнеүсән холҡон! Ана бит, аэропортҡа улымды эйәртеп үк килеп тә еткән. Рәхмәт яуһын үҙенә, тим! Себерҙән миңә күстәнәскә кедр сәтләүеге һалғандар, улар, күрәһең, шул тиклем өлгөргән, көнбағыш һымаҡ, сыртлап ярылып торалар. Ирем минең йәшле күҙҙәремде күреп, һағайып китә, үҙе шунда уҡ хәлде аңлаған төҫ ала. Их, белһә икән ул минең эстә ниндәй көрәш барғанын... "Рәшит, һиңә кисекмәҫтән бер хәбәр әйтергә тейешмен!"- тим. Ул миңә аптырып ҡарай: "Кейәүгә сығып ҡайтмағанһыңдыр ул?" Эй, ошо ирҙәрҙе! Баштарында тик бер уй!

Ағайымдың вафатына биш йыл тигәндә, аҙашымдан хәбәр алдым. Өфөгә киләм, тиген. Ғүмер буйы ситтә йөрөһә лә, йөрәгендә тыуған яғы мәтрүшкәләрен һаҡлаған ағайымды кедр сәтләүеге һымаҡ һәр кемгә асылып бармаҫ сер донъяһы, тип уйлағайным. Әллә мәтрүшкә сәскәләреләй нескә күңелле зат булдымы ул? Ҡыҙы ниндәйерәк икән?

**(Аҙағы. Башы 2-се һанда).**

*ТҮҢӘРӘК КЕНӘ ЙӘШТӘБЕҘ*

**Күренекле яҙыусыбыҙ, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Әмир ӘМИНЕВҠА ошо көндәрҙә 60 йәш тулды. Уға гәзитебеҙҙең традицион өс һорауын бирҙек.**

# ЕТЕ ҮЛСӘП...

## бер киҫергә тура килә

▸ **Ғүмер буйы яҙғандарығыҙ араһынан үҙегеҙҙең төп әҫәрегеҙ итеп ҡайһыһын атар инегеҙ һәм ни өсөн?**

-Атайым әйтә торғайны, ҡулда биш бармаҡ, ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта. Һеҙ биш бала, һәр ҡайһығыҙ берҙәй ҡәҙерле, тип. Шуның һымаҡ, миңә лә яҙған һәр хикәйә, повесть, хатта мәҡәлә, рецензия ла үҙенсә ҡәҙерле. Сөнки һәр ҡайһыһына көс түгелгән, ғазап кисерелгән, уйланып йөрөлгән. Шулай ҙа классик әйтмешләй, төп әҫәр әле яҙылмағандыр, тип иҫәпләйем.

▸ **"Ҡытайгород", "Бер кәмәлә", "Танкист", "Йондоҙ-сәскә" кеүек бер нисә әҫәрегеҙҙә һеҙ ваҡиғаларҙың ғәҙәти ағышы логикаһынан ситләшеп, көтөлмәгән парадоксаль йүнәлеш алаһығыҙ һәм уҡыусыны ысынбарлыҡ менән хыял, булыуы ихтимал ваҡиға менән реаль ваҡиға араһына алып инәһегеҙ. Сер булмаһа, был ниндәй маҡсаттан сығып башҡарыла, махсус эшләнеләме әллә үҙенән-үҙе шулай килеп сығамы?**

-Әлбиттә, мин уларҙы махсус эшләмәйем. Хәйер, улай тиһәң дә, махсус та эшләйем. Бер үк кәнфитте ике төрлө ҡағыҙға - кәҙҙен яуын алырлыҡ йылтыр ҡағыҙға, икенсеһен, әйтәйек, гәзит киҫәгенә төрөп прилавкаға һал, һатып алыусы мотлаҡ рәүештә йылтыр ҡағыҙлыһын аласаҡ. (Һуңынан икеһен дә ашатып ҡара, йылтыр ҡағыҙлыһы тәмлерәк, тип иҫбатларға тырышасаҡ әле, етмәһә!) Шуның ише әҫәрҙе лә уҡыусыға "төрөп" бирә белергә кәрәк, йәғни әҫәр, иң беренсе сиратта, мауығып уҡырлыҡ булырға тейеш. Һин ниндәй генә глобаль проблема күтәрмә, әҫәрең менән ниндәй генә ҙур фекер әйтергә ынтылма, ул һине тәүге битенән, хатта беренсе һөйләменән үк үҙенең эсенә тартып индерә алмай икән, һин еңелеүгә дусар ителдең тигән һүҙ. Ана шул йылтыр кәнфит ҡағыҙы ул "парадоксаль йүнәлеш, ысынбарлыҡ менән хыял булыуы, ихтимал ваҡиға менән реаль ваҡиға". Урыҫса әйтмешләй, благородный обман.

Бала-саға ни өсөн мажаралы йәки боевикҡа тартым мультфильм ҡарай йәки шундай китап уҡый? Сөнки ул мауыҡтырғыс, унда динамизм, хәрәкәт бар, үрҙә әйткәнсә, ысынбарлыҡ менән хыял араһында. Оло уҡыусыға ла шулай яҙырға кәрәк - ул бала-сағанан, үсмерҙән ни яғы менән кәм? Бында икенсе мәсьәлә ҡалҡып сыға: һин, яҙыусы, ошо ике яҫылыҡты (ысынбарлыҡ менән хыял, булыуы ихтимал ваҡиға менән реаль ваҡиға, ғәҙәти логиканан көтөлмәгән парадоксаль йүнәлеш һ.б.) нисек тоташтыра-бәйләй алаһың? Сөнки йөй, төйөн, еп күренергә тейеш түгел. Был ике яҫылыҡ бергә уҡмашып бер бөтөн әҫәр барлыҡҡа килтерә, герой характерын аса, һинең фекереңде, әйтер һүҙеңде көсәйтә. Һәр хәлдә шулай булырға тейеш. Ялғау, ямау, йәбештереү шәйләнһә, уҡыусы ышанмаясаҡ бит. Был яйһыҙ уҡ ауыр һөнәр оҫталыҡ талап итә торған эш. Ете үлсәп бер бесергә тура килә. Мин әҫәрҙе, хатта мәҡәләне, рецензияны ла художестволы итеп яҙырға тырышам - килеп сығамы, юҡмы, уныһы икенсе мәсьәлә - шул саҡта ғына ул уҡыусыға ҡыҙыҡ буласаҡ.

▸ **Яҙыусы булмаһағыҙ, бөгөн үҙегеҙҙе ниндәй һөнәр эйәһе тип күҙ алдына килтерер инегеҙ?**

-Яҙыусы булмаһам... яҙыусы булыр инем. Сөнки шунан башҡа эшкә һәләтһеҙ һымаҡмын.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Оло юбилейы алдынан Әмир Әминев урыҫ теләндә донъя күргән "Ҡытайгород" китабы өсөн "Рәсәйҙең ҙур әҙәби премияһы"на лайыҡ булды. Уны ошо еңеүе һәм алтын юбилейы менән ҡотлайбыҙ, оҙон ижади ғүмер теләйбеҙ!**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# АШЫҠМАЙ ЙӘШӘҺӘҢ...

## барыһына ла ваҡыт табыла

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Рөстәм НУРЫЕВ, Башҡортса Википедия ирекмәне:** Үҙебеҙҙе борсоған һорауҙар тураһында оран һалыу менән куберәк мауығабыҙ шикелле. Бөтә булған көсөбөҙҙө мәсьәләне күтәреп сығыуға, уның сәбәптәрен күрһәтеүгә, артабан уларҙы хәл итеүҙе кемдәндер талап итеүгә сарыф итәбеҙ. Һис шикһеҙ, уныһы ла кәрәк. Ләкин бөтә нәмә өсөн сама тигән төшөнсә бар. Борсоған һорауҙарҙы күтәреп сығыу менән бер рәттән, уларҙы хәл итеү юлын хәстәрләһәк, һөҙөмтә нәтижәлерәк булыр ине. Төплө тәнә уйлаһаң, тормош асылы - килеп тыуған мәсьәләләрҙе хәл итеү ул. Әгәр бер генә ҡатмарлыҡ та булмаһа, тормош та булмаҫ ине. Шуғалыр ҙа атайым гел: "Сәбәп эҙләмә, яйын тап", - тип әйтә торғайны.

Милләт йәшәйешендә һәр йүнәлеш - көнүҙәк мәсьәлә. Уның олоһо-кесеһе юҡ. Һәр береһен ваҡытында хәл итеп барһаҡ, борсолоуҙар ҙурға китмәҫ ине. Һуңғы ваҡыт башҡорт телен белгән кешеләрҙең һаны һәм телде ҡулланыу даирәһе кәмеүе тураһында күп һөйләйбеҙ, сөнки был кире күренеш ҙурға китә башланы. Шуныһы үкенесле: килеп тыуған хәл тураһында башлыса урыҫ телендә оран һалабыҙ. Интернетта ла шуны күҙәтәм: башҡорт телен һаҡлау һәм ҡулланыу тураһында бәхәстәр урыҫ телендә, йә иһә башҡорт телен вата-емерә яҙыла. Бер кеше миңә компьютер өсөн башҡорт шрифты, клавиатура ҡатламы юҡлығына әсенеп зарланды. Үҙенең компьютерындағы Windows 7-се менән бергә килгән клавиатура ҡатламын асып күрһәтеп, көйләп биргәйнем: "Уны эҙләп ултырырға минең ваҡытым юҡ ине", - тип шаҡ ҡатырҙы. Милләткә ҡағылышлы ниндәй генә мәсьәлә күтәрһәк тә, һәр саҡ ваҡыт етмәүгә зарланабыҙ. Шуға күрә, милләттәштәремә "Сәбәп эҙләмәгеҙ, яйын табығыҙ", тип әйткем килә. Тормошта ашыҡмай йәшәргә кәрәк икән ул, шул сағында бөтә ергә өлгөрәргә була. Теләгең булһа, һәр нәмәгә ваҡыт табыла.

ИНТЕРНЕТТАН



# МАТУРЛЫҠТЫҢ... үлсәүҙәре бармы?

■ Көнөнә 4 стакан лимонад эсеүселәр депрессияға йышыраҡ бирелә, тип раҫлай Америка неврология академияһы белгестәре. АҠШ-та уҙғарылған тикшеренеүҙәрҙә 50 йәштән 71 йәшкә тиклемге 264 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың ниндәй эсемлектәргә - сәйгә, ҡәһүәгә, емеш-еләк һуттарына, лимонадҡа өҫтөнлөк биреүен тикшергәндән һуң, ғалимдар лимонад яратыусыларҙың күберәк төшөнкө кәйефтә булыуын асыҡлаған. Ә кем көнөнә 4 сынаяҡ ҡәһүә эскән, улар был эсемлекте яратмаусыларға ҡарағанда депрессияға һирәгерәк бирелгән. Төньяҡ Каролинаның Сәләмәтлек милли институты докторы Хонглей Чена аныҡлауынса, татлы эсемлектәрҙе ҡәһүә менән алыштырыу депрессия хәүефен күпкә кәметергә ярҙам итәсәк.

■ Хайфа Сәләмәтлек милли институты (Израиль) ҡатын-ҡыҙҙар өсөн идеаль параметрҙар иҫәпләп сығарған. The Epoch Times яҙыуынса, иҫәпләүҙәр һөҙөмтәһендә асыҡланыуынса, буйы 170 сантиметр булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауырлығы 77 килограмм булырға тейеш. Күптән түгел Израилдә подиумға ябыҡ моделдәрҙе сығармау тураһында закон ҡабул ителде. Был сара - модель стандарттарына ярарға тырышҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙа барлыҡҡа килеүсе анорексияны булдырмауға йүнәлтелгән. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ матурлығы идеалына килгәндә, эштәр былайыраҡ тора. Әгәр ҙә 2012 йылда үткәрелгән һорау алыуҙар буйынса ҡараһаҡ, гүзәл заттың ирендәре Скарлетт Йохансондыҡына, сикәһе ҡара тәнле һылыу Холли Берриныҡына, тиреһе Эмми Адамс һәм тәне Пенелопа Круска оҡшаһа, ул матур, тип иҫәпләнер ине.

■ Стокгольм университеты ғалимдары раҫлауынса, мармелад, емеш желелары, төрлө ҡайнатмалар сәләмәтлек өсөн мотлаҡ кәрәк, сөнки уларҙың составындағы пектин организмдан зарарлы матдәләрҙе сығарыуға булышлыҡ итә. Пектин - үҙенсәлекле химик структураға эйә булған үсемлек сығышлы углевод. Ул организмдан ауыр тоҙҙарҙы, ҡурғаш һәм башҡа матдәләрҙе сығарыу һәләтенә эйә. Еләк-емеш желеһы һәм мармелад организмдың бөтөн проблемаларын хәл итә алмаһа ала, күп белгестәр иҫәпләүенсә, был татлы ризыҡтарҙы көн һайын ашау күңелһеҙ өҙлөгөүҙәр хәүефен күпкә түбәнәйтә.

■ Имбир тамырында 3 процентҡа тиклем эфир майҙары һәм күп төрлө аминокислоталар бар. С, А, В1, В2 витаминдары, шулай уҡ цинк, кальций, калий, натрий, тимергә бай был тәмләткес баш мейеһен кислород менән байыта һәм артериаль ҡан баҫымын төшөрә, матдәләр алышыныу процесын нормалаштыра. Имбир сәйен белгестәр бигерәк тә миҙгелле сирҙәр киҫкенләшкән ваҡытта эсергә тәҡдим итә.

■ Байрамдарҙы мул ризыҡлы табын артында үткәргәндән һуң, үҙенде диеталар һәм асыҡыу менән яфаларға ярамай, ти табиптар. Уларҙың фекеренсә, ҡатыҡ эсеп йәки алма ашап ҡына үткәрелгән бер көн диеталарға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Көнөнә 4-5 тапҡыр әҙ-әҙләп ашау, аш һеҙдереү органдары функцияһын боҙоусы продукттар, мәсәлән, тәмләткестәр, маринадтар, ыҫланған ризыҡтар, хайуан майҙары ҡулланмау ҙа ашҡаҙан эшен көйләп ебәрәсәк. Әгәр ҙә бер ниндәй ҙә ауырлыҡ кисермәйһегеҙ икән, организмды шлактарҙан таҙартыу өсөн өҫтәмә саралар күреү кәрәклеге юҡ. Бары тик майлы һәм татлы ризыҡтарҙан баш тартығыҙ.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# БӘЙҒӘМБӘР ТОРМОШОН ӨЙРӘН - һорауҙарыңа яуапты шунан табырһың



**Ай календары буйынса Рабиғел әүүәл айының 12-се көнө (быйыл 23 ғинуар ҡояш байығандан 24 ғинуар ҡояш байығанға ҡәҙәр) - Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) донъяға килгән көн. Халыҡта был көндөң кисен Мәүлит кисе, ә айҙы Мәүлит айы тип тә йөрөтәләр. Салауаттар уҡыу, зекер әйтеү, Бәйғәмбәр тормошон ныҡлап өйрәнеү хуплана. Ҡөрьән уҡылған һәм дин хаҡында әңгәмәләр алып барылған Мәүлит табындары әүәле халҡыбыҙҙың ай буйына һуҙылған матур дини йолаларынан булған.**

Эскелек, наркоманлыҡ, аҙғынлыҡ һаҙлығына батабыҙ, донъяла яуызлыҡ хөкөм һөрә, ғәҙеллек юҡҡа сыҡты, тип яр һалабыҙ. Ысынлап та, халыҡ аңын дөйөм өмөтһеҙлек, депрессия, суицид тураһындағы уйҙар томалай. Донъяны ҡотҡарыусы супергеройҙар тураһындағы текә фильмдар ҙа, йәшәүҙе еңеләйтергә, уға йәм өҫтәргә тейешле замансa технологиялар ҙа, социаль сирҙәрҙе, был яман афәттәрҙе кисектереүгә һәм юҡ итеүгә арналған конференциялар, форумдар, акциялар, трибуналарҙан яңғыраған телмәрҙәр ҙә һөҙөмтә килтермәгән һымаҡ. Кеше тигәнең барыбер күңел тыныслығына өлгәшә алмай ыҙалана. Артабан да шулай өмөтһеҙлеккә бирелеп, заманаһы шулай, тип ҡул һелтәп, башты баҫып, киң йәмәғәтселек фекеренә буйһоноп йәшәүҙе дауам итергәме? Йә булмаһа, донъяны балҡытыу, рухи яҡтан яҡтыртыу сараларын, юлдарын эҙләргәме?

Ә бит йәмғиәтте өмөтһеҙлөк баҫҡан бындай замандар элек тә булған. Уларҙың бөтәһен дә һанау кәрәклеге юҡ, әммә береһенә туҡталмау мөмкин түгел. Ул да булһа, VI быуат ахыры, VII быуат башы осорондағы ғәрәп йәмғиәте. Аҙғынлыҡ, эскелек, фәхеш йорттары, социаль статустары түбән булғандарҙы кешегә һанамау, дөйөм ғәҙелһеҙлек - шул йәмғиәтте һүрәтләгән күренештәр булар. Ҡыҙ балаларҙы тереләй күмеү ҙә - шул заман атрибуты. Йәһилиәт тип аталған ҡараңғылыҡҡа бәләкәй генә яҡтылыҡ өҫтәүселәр - ошо бысраҡлыҡ араһындағы аҙ һанлы ғәҙеллек көсәүселәр, хәҡиҡәткә ынтылыусылар һәм ырыуҙаштарының ни тиклем тәрән һаҙлыҡҡа батыуҙарын аңлаусылар уларҙы Ҡотҡарыусыны көтә.

Ҡара төндән һуң таң атасаҡ, Аллаһы Тәғәлә уларҙың доғаларына яуап бирәсәк, вәғәҙә ителгән бәйғәмбәр

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

# ХӘРЕФ-ӨНДӘР АТАМАҺЫ ҺӘМ... һандар хикмәте





**Астрологияның һандар менән бәйле өлөшө хәл-ваҡиғаларға, исем-шәрифтәргә, тыуған йылдарға һандар йөкмәткеһенән сығып аңлатма бирә. Ә бына ошо аңлатма-йөкмәткеләрҙең тамыры тураһында беҙ бик уйлап ҡарамайбыҙ. Ә бит һәр хәл-күренештең, белемдең сығанағы бар. Ошонан сығып ҡараһаң, астрология менән бәйле нумерологияның сығанағы боронғо алфавиттарҙағы хәреф-өндәрҙең мәғәнәүи йөкмәткеһе менән бәйле икән.**

Беҙҙең быуындың хәҙер ғәҙәти булған хәреф-өндәрҙең һәр береһенең тиерлек боронғо ваҡытта тотош бер фәлсәфәүи һәм хатта фәнни йөкмәткеһе булған икәнен ишеткәне булманы. Баҡһаң, элекке замандарҙа хәреф-өндәрҙең артикуляцион әйтелеше һәм музыкаль ритмик биҙәлешенән тыш, һәр хәрефтең график идея йөкмәткеһе, эзотерик мәғәнәһе, кеше тәбиғәтенең психологик сифаттарын аңлатыусы атамаһы, әйтелеш көйөнөң гармоник аһәнен, ритмик үлсәүен, әйтергә яраһа - ҡыҫҡа ғына итеп композицияһын һүрәтләүсе һаны, ошо һандар ритмы аша ерҙәге законлыҡтарҙы Йыһан менән бәйләй торған төшөнсәләре, планета һәм йондоҙлоҡтары булған. Һәм был идея-йөкмәткеләрҙә фәнни дин ғилеме, юғары тәғлимәткә эйә белем, ғилми хикмәттәр, тәрән йөкмәткеле образдар йәшеренгән. Тик был ғилем-белем боронғо замандарҙа ла бөтә кешеләргә бирелмәгән. Юғары кешелек сифаттарына эйә булған, һынаған һәм һайланған инсандарға ғына бындай мәктәптәргә юл асылған. Был мәктәптәрҙә бирелә торған ғилем (ҡайһыларына әле беҙ ҙә төшөнә алмайбыҙ) наҙандар ҡулына, бигерәк тә үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртып йәшәүсе һөмһеҙ, тәкәббер әҙәмдәр ҡулына эләгеп, бәлә-ҡазалар тыуҙырмаһын өсөн, белем кинәйәләп, ситләтеп әйтелгән, йәшерен мәғәнәлә, беҙҙең заман теле менән әйткәндә, шифрланған тел менән уҡыусыға еткерелгән. Ошоға ярашлы, телдә күп мәғәнәлектәр, омоним-синонимдар, йомаҡ-әйтемдәр, йомаҡлы тасуири образдар барлыҡҡа килгәндер, тип фараз итергә төплө урын бар. Беҙҙең халыҡтың ауыҙ-тел ижады ла ошондай кинәйәләр, ым-ишаралар, тәрән йөкмәткеле тасуири сағыштырыу, образлы әйтем-мәҡәлдәр, йомаҡтарға ғәжәйеп бай.

Боронғо алфавиттарҙа хәрефтәр өндән тыш, һанды ла белдереп килгән. Шуға боронғо алфавитҡа таянып, тексты уң яҡтан уҡығанда - һүҙҙең, һулдан уҡығанда һандың мәғәнәһе асылыу тенденцияһы ла бар. Әлбиттә, бөтә осраҡта ла түгел. Был күренештең айырым һүҙҙәрҙә генә булыуы ла ихтимал. Мин һылтанасаҡ боронғо йәһүд (древнееврейский) алфавиты менән яҙылған текстарҙы ундан һулға уҡығандар. Ошо алфавитҡа нигеҙләнеп, ғәрәп алфавиты барлыҡҡа килгән. Һәм, әйтеүемсә, һүҙҙең мәғәнәһен, бигерәк тә эзотерик йәшерен йөкмәткеһен асыҡлар өсөн ике яҡтан да, хатта ҡайһы бер осраҡтарҙа һүҙ эсендәге ижектәр өндәренең урындарын алмаштырып та уҡып ҡарарға кәрәк. Һуңғы осраҡта инде математик принцип ята, һандарҙың урынын алыштырыуҙан сумма үҙгәрмәй.

Ундан - һулға, һулдан уңға уҡыуҙа мейе эшмәкәрлеге менән бәйле булған күренеш тә ята. Һул ҡул яғы (ҡатын-ҡыҙҙар яғы) мейенең уң яҡ эшмәкәрлеге менән бәйле. Мейенең уң яҡ ярымшары күҙ алдына килтереү, визуаллаштереү, хис-тойғо, тасуири образдар менән бәйле. Уң ҡул яғы (ирҙәр яғы) һул яҡ мейенең ярымшары менән бәйле. Был ярымшар инде логик фекерләү, анализ һ.б. өсөн яуаплы. Ошонан сығып, беҙҙең халыҡта ла борон-боропдан һулды - ҡатын-ҡыҙҙар яғы, уңды ирҙәр яғы тип йөрөтөлгән. Был күренешкә таянып, шуны фаразларға була: ирҙәр яғы, ирҙәр принцибы аша ҡояш системаһына, ҡояш хәрәкәтенә бәйләнешле объектив донъяны, һул яҡ - ҡатын-ҡыҙ яғы аша ай менән, ай тәьҫиренә бәйләнешле булған эске, субъектив донъяны тасуирлаған һүҙҙәр йөкмәткеһен асыҡларға мөмкин. Әммә был мәғәнәләр үҙ-ара бик тығыҙ бәйләнештә, беренсеһе икенсеһенә үтеп инә, киҫешә, икенсеһенә таянып үҙгәрә, үрсей, үҫә, сифатын, хәл-торошон, шунан сығып, хатта атамаһын үҙгәртә, тулыша һәм кәмей. Һүҙ йөкмәткеһе эсендә лә тормоштағы кеүек әүҙем хәрәкәт бара. Донъяны танып-белеүҙең бөтә процестары ошо ике принцип - ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар принцибының үҙ-ара гармоник мөнәсәбәтендә, бер-береһенә тәьҫир көсөндә асыҡлана һәм дәлилләнә.

Гөлфирә ҠОТЛОМӨХӘМӘТОВА.

(Дауамы бар).

ошо ҡараңғылыҡты юҡҡа сығарасаҡ, мәңгелек ҡояш булған изге китап менән ебәреләсәк икәненә ышана улар.

Быйыл өсөн сирек быуаттан да әҙерәк ваҡыт кәрәк буласаҡ. Ошонан һуң инде "Көслөнөкө - замана", тип, кешене бәләкәй генә хатаһы, йә оҡшамағаны өсөн үлтерергә әҙер булған, тормош мәғәнәһе тураһында уйлап та бирмәгән наҙан, рухи яҡтан һуҡыр, тарҡау ғәрәптәр ике донъя өсөн дә бәхет килтерә торған ҡиммәттәрҙе таратасаҡ, ғәҙеллек һәм намыҫлылыҡ символына әүереләсәк, фәндә Европаны әллә күпмегә артта ҡалдырасаҡ, бер нисә быуат буйына донъяның иң көслө, иң бөйөк милләтенә әйләнәсәк. Киләсәктә уларҙың өлгөһөнә эйәреп, тиҫтәләгән башҡа милләттәр аң томаналығынан ҡотолоп, үҙҙәренең "алтын быуаттарын" кисерәсәк. Ә кисә генә ҡыҙҙарын тереләй күмгән бәҙәүиҙәр, ерҙә йөшәгән бөжәктәрҙе, ҡырмыҫҡаларҙы үлтерә баҫмаҫ өсөн, аяҡтарына ҡыңғырау таҡып йөрөйәсәк. Кешелек тарихында булмаған ошондай бөйөк аң революцияһына, кәлебтәрҙең ҡотоптары ҡырҡа үҙгәреүенә, рухи һәм физик бахырлыҡтан ҡотолоуҙарға булышлыҡ итеүсе Аллаһ Илсеһе - ул Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) булыр.

Майкл Харт, кешелек тарихындағы иң билдәле шәхестәр тормошона, эшмәкәрлегенә төрлө яҡлап ентекле анализ үткәреп, уларҙың әҙәм балалары аңына, күңелдәренә, дәүергә һәм киләһе быуындарға йоғонтоһон тикшергәндән һуң, үҙенең "Иң бөйөк 100 кеше"китабында Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе беренсе урынға ҡуя. Тағы ла бик күп билдәле ғалимдар, яҙыусылар, дәүләт эшмәкәрҙәре, хәрбиҙәр һәм башҡалар миллионлаған кешеләрҙең рухи остазына һәм идеалына әйләнгән Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең уникаллеге менән һоҡлана.

Мөхәммәт бар донъяны ҡараңғылыҡ сорнап алғанда, рухи ҡиммәттәр инҡар ителгәндә, тупаҫлыҡ идаралығы аҫтында йәшәгән йәмғиәттә һүнмәҫ нур булып донъяға килә. Бәйғәмбәрлеккә тиклемге 40 йыл ғүмере яуызлыҡта һәм әхлаҡһыҙлыҡта хайуандан да түбән тәгәрәгән кешеләр араһында ла Кеше булып ҡалыу өлгөһө булһа, 23 йыллыҡ бәйғәмбәрлек осоро нәфсенә һәм шайтан ҡотҡоларына алданған ошо түбән халыҡтан фәрештәләр көнләшәсәк шәхестәр тәрбиәләү өлгөһө була. Эйе, физик яҡтан ул бар әҙәм балалары кеүек үк ябай кеше. Унын бөйөклөгө - уның эштәрендә һәм Аллаһы Тәғәлә биргән бөйөк миссияны үтәүендә.

Ул ике донъя бәхете өсөн иң мөһим нәмәләр - дөрөҫ иманды, хаҡ динебеҙ исламды, мосолмандың йәшәйеш ҡағиҙәләре йыйынтығы - Ҡөрьәнде кешелеккә килтергән һуңғы бәйғәмбәр. Ул - бәйғәмбәрҙәр имзаһы, уларҙың иң бөйөгө, Ҡиәмәт хәбәрсеһе һәм Аллаһы Тәғәләгә инаныусылар өсөн бәхетле хәбәр килтереүсе.

Кеше булмышына ҡаршы килгән идеалдар әҙәм балаһының аңына көсләп, йә алдаҡ аша һеңдерелгән заманда үҙенең һәм киләсәк быуындарҙың киләсәгенә битараф булмаусыларға Мөхәммәт бәйғәмбәр шәхесен өйрәнеү, уны аңларға тырышыу бик мөһим. Изге Ҡөрьәндә һәм Унын тормошонда бар кешелеккә файҙа килтерәсәк, фани һәм баҡый донъяла бәхетле итәсәк, иҫкермәҫ һәм юҡҡа сыҡмаҫ идеялар, ҡиммәттәр ята.

**Әйткәндәй, 26 ғинуарҙа Бәйғәмбәребеҙҙең ислам ҡанундарын халыҡҡа түкмәй-сәсмәй илтеп еткерергә, тигән аманатын үҙе исән саҡта уҡ үтәп, йәнтөйәгебеҙҙә ислам нурын таратҡан сәхәбәләрҙең һуңғы төйәге - Миәкә районы Нарыҫтау итәгендә Мәүлитшәриф уҙғарыла. Сара көндөҙгө сәғәт 11-ҙә башлана. Рәхим итегеҙ!**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

## ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

### Ит ашауҙың кире яҡтары

Тештәрегеҙгә күҙ һалығыҙ әле, улар йыртҡысыҡына оҡшағанмы? Юҡ. Тимәк, тәү баштан уҡ кеше организмы ит ашауға яраҡлаштырылмаған. Анатомияны һәм кеше физиологияһын яҡшы белгән берәйһе менән һөйләшегеҙ, улар һеҙгә беҙҙең эсәктәребеҙҙең итте эшкәртеү өсөн бик ҡыҫҡа булыуын әйтер. Күпселек дини тәғлимәттәрҙә ит ҡулланыуға ҡаршы йүнәлтелгән идеялар бар. Хатта традицион рәүештә ит ризыҡтарына өҫтөнлөк биреүсе тип һаналған башҡорттарҙың да ҡасандыр ит ҡулланмауы легендаларҙа һәм риүәйәттәрҙә һаҡланған. "Урал батыр" эпосы ошо мәсьәлә буйынса ҡоштарҙың һәм хайуандарҙың ҡыҙыу бәхәсенән башлана. Ҡөрьәндә ҡорбан итеп ҡуй салыу хупланһа ла, күпселек мосолман аскеттары ит ашауҙан баш тарта.

Будда философияһы тотош ошо идеяға ҡоролған. Кем ит ашай, ул ғына түгел, кем шуға булышлыҡ итә, ул да үҙенә бәлә килтерә, тип раҫлана. Тере йәнде һуйыусы - ҙур гонаһлы, сөнки ул хайуандың ыҙаланыуы, интегеүе өсөн үҙенә яуаплылыҡ ала. Хатта үҙе ашамаһа ла, баҙарҙан ит һатып алыусы ла үҙенең кармаһын ҡатмарлаштыра. Кем үлтерелгән хайуандың итенән ризыҡ әҙерләй, ул да гонаһтың бер өлөшөн үҙенә ала.

### Таң - бәрәкәт ваҡыты

Ошоға тиклемге яҙмаларымды уҡып, был бар ваҡытын сәләмәтлеген нығытыуға ғына бағышлаған икән, тип уйлауығыҙ бар. Юҡ, мин ғәҙәти - етерлек тәжмин ителмәгән, билдәһеҙ, айырым һәләте һәм таланты булмаған кеше тормошо менән йәшәнем. Матди планда ҡарағанда, уҙған быуаттың 90-сы йылдары ғаиләм өсөн бик ауыр булды. 1990 йылда мин журналист профессияһы менән хушлашып, педагогия институтына уҡытыу эшенә күстем. Дөйөм белем биреү мәктәбендә, институтта эшләгән педагогик стажым һыҙып ташланды. Барыһын да нулдән башларға тура килде. Мәктәптә эшләп ҡарамаған уҡытыусы нисек итеп уҡытыусылар әҙерләй ала? Бәхтиһән, ала икән, һәм был тейешле инстукциялар менән нығытылып ҡуйылған.

1990 йылдың 1 сентябренән мин ҡәтғи тормош тәртибенә күстем. Сәғәт иртәнге 5.30-ҙа тороп, "Юбилей" мәҙәниәт һарайы артындағы паркка йүгерергә сыҡтым. Быйаса бындай тормош рәүеше тәжрибәм бар ине инде. Ҡолсора ауылында, һуңынан Сибайҙа йәшәгәндә беҙ бер нисә кеше һөйләшеп, ҡәтғи көн тәртибен йәйгә һалырға тырышҡайныҡ. Әммә был гел генә уңышһыҙ тамамланды, сөнки кемдер мотлаҡ билдәләнгән тәртиптән тайпылып, бөтөн төркөмдөң тарҡалыуына килтерҙе. Өфөлә мин шундай ҡағиҙә булдырҙым: "Үҙең, бары тик үҙең генә шөғөлләй". Кем тормошон үҙгәртергә теләй, тәҡдим итәм: ошо ҡағиҙәне иҫеңдән сығарма. Бер ваҡытта ла балаларың, дуҫтарың, коллегаларың менән бәйләнмә. Күнекмәләр эшләргә теләһәң, бары тик яңғыҙың ғына шөғөллән, бары тик үҙеңә генә ышан. Мин 18 йыл ошо ҡағиҙәне тотам һәм уның хаҡлығына тағы ла нығыраҡ инанам.

Ҡыҙыҡ итеп шуны күҙәткәнем бар: яҙғыһын паркта йүгереүселәр күбәйеп, хатта тығыҙ булып китә. Аяҡтарын көскә һөйрәп, пенсионерҙар ҙа йүгерә. Матур спорт костюмдарында ҡыҙҙар төркөмө йүгереп үтә. Уларға ҡаршы ялҡауҙары килеп кенә үҙ-ара һөйләшеп йүгерешкән егеттәр осрай. Улар хатта ҡыҙҙарҙы күрмәмешкә һалыша, йәнәһе, шул тиклем етди эш менән мәшғүлдәр! Әлбиттә, тегеләре лә, былары ла мине - иҫке генә трикола күҙгә салынып бармаған кешене күрмәнеләр. Әммә бындай идиллия оҙаҡҡа һуҙылманы - ямғырлы, елле көндәрҙә паркта ни бары бер генә кеше ҡалды. Ул мин инем.

Көн һайын иртән тороуы ауыр булды. Бигерәк тә изәндә бер матраста ғына йоҡлағандан һуң. Бөтөн тән ауырта һәм һыҙлай. Ул: "Әйҙә, бөгөн ял итәйек! Характерҙы нығытыу өсөн алты көн рәттән йүгереү етер. Шулай һөйләшәйек: алты көн йүгерәбеҙ, йәкшәмбе ял итәбеҙ", - тип инәлде. Ҡайһы бер ваҡытта тәнемдең үтенесенә иғтибар итеп, урынымдан торманым. Әммә дүшәмбе иртән үҙемде кәрәкле ваҡытта торорға мәжбүр итә алманым.

Тәндең һәм аҡылдың хәйләкәрлегенә инанып, икенсе ҡағиҙәне сығарҙым: "Нимә билдәләгәнһең, бер нindәй тайпылыуһыҙ үтә!" Тәнем мыжый башлаһа, мин уны үҙем, исмаһам, урамға булһа ла сығайыҡ, тип күндерә инем. "Кейенәйек, сығайыҡ - аҙаҡ ҡарарбыҙ. Бәлки, йүгермәбеҙ ҙә". Ләкин саф һауаға сығыу менән тәнем үҙе үк: әйҙә, ике түңәрәк булһа ла йүгерәйек, тип өгөтләй башлаңы. Һәм беҙ, ҡағиҙә буларак, өйрәнелгән программаны тулыһынса үтәй инек. Уны мин организмға көсөргәнеш булмаҫлыҡ итеп төҙөнөм. Төп баҫымды көн һайын мотлаҡ рәүештә паркка сығыуға яһаным. Тәүге көндә күпме йүгерә алам, шунса йүгерҙем. Йүгергән әйләнәмде аҙымлап һанап сыҡтым. Дүрт әйләнешкә 560 метр килеп сыҡты. Ай һуҙымында шул арауыҡты булһа ла йүгерергә тырыштым. Ҡайһы берҙә уны үтәй алдым, ҡайһы берҙә - юҡ. Бер айҙан һуң тағы бер әйләнә өҫтәнем - 700 метр булды. Киләһе йылына инде мин һәр көн иртән ике километр самаһы йүгереп үтә инем. 1995 йылда 11 километр йүгерҙем. Был көндә мин наркомандар ҡаразирә (дурман) ярҙамында алған торошҡа еттем - сикһеҙ, бөтөн тәндә ялмап алған рәхәтлек. Әммә наркомандарҙан айырмалы, мин был торошҡа физаҡәр хеҙмәт һәм нығышмалыҡ ярҙамында өлгәштем.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

32. Стивен Ковиҙың "Юғары һөҙөмтәле кешеләрҙең ете оҫталығы" тип аталған китабын уҡығыҙ. Ул үҙенә аҡыл дингеҙен, шәхси мөнәсәбәттәрендә үҫтереү системаһын һәм характерыңды артабан нығытыу буйынса кәңәштәр туплаған.

33. Магнит таҫмаһы яҙмаларын, дискыларҙы ҡомарлы тыңлаусы булығыҙ. Хәҙер үҙенде камиллаштырыуҙың күпселек программалары һәм дәртләндереү китаптары магнитофон таҫмаларында йәки дискыларҙа һатыла. Ошо дәртләндереүсе материалдарҙы эшкә барғанда, берәй ерҙә сиратта торғанда йәки аш-һыу бүлмәһендә һауыт-һаба йыуғанда тыңлағыҙ. Машинағыҙҙы тәғәрмәсле университетҡа әйләндерегеҙ һәм юл арауыҡын белемде иң яҡшы дуҫығыҙ итеү маҡсатында файҙаланығыҙ. Көтөү йәки мәжбүри эшһеҙлек ваҡытын шулай файҙалы үткәрергә мөмкин. Был ысулдарҙы уҡыуға, аңығыҙҙы даими киңәйтеү мөмкинлектәренә һәм уның иң киткес ҡеүәтен киңәйтеүгә файҙаланығыҙ.

34. Ике аҙнаға, исмаһам, бер көн ураҙа тоторға тырышығыҙ. Бындай көндәрҙә емеш-еләк һуттары ғына эсегеҙ һәм бары тик емеш-еләк кенә ашағыҙ. Үҙегеҙҙә энергия артыуын, эске иркенлекте һәм хистәр ҡеүәтен тойорһоғоҙ. Ураҙа шулай уҡ һеҙҙең ихтыяр көсөнә тәрбиәүи йоғонто яһар, сөнки мейегеҙҙең күберәк ашарға саҡырған нығышмал импульстарын баҫырға тырышасаҡһығыҙ.

35. Офисығыҙҙа йәки эш урыныгыҙҙа көн дауамында тыныслаңдырыусы музыка тыңлағыҙ. Тәмле еҫ биреүсе дезодоранттарҙы һәм дәртләндереүсе картиналарҙы эш өҫтәлегеҙ эргәһенә урынлаштырығыҙ. Мөғжизә иҫәбенә эшегеҙ ҡыуаныска әүерелер, ә күңелегеҙҙә матур хистәр тыуыр. Командировкаларҙа саҡта ваҡытығыҙҙың ярты сәғәтен китап кибеттәрендә үткәрерлек итеп планлаштырығыҙ. Уларҙа һәр ваҡыт үҙ-үҙеңде камиллаштырыу буйынса яңы китаптар һәм аудиояҙмалар була.

36. Джеймс Аллендың "Фекерләүсе кеше" тип аталған китабын уҡығыҙ. Уны бер ҡабат ҡына түгел, даими рәүештә ҡабат-ҡабат уҡып торорға кәрәк. Ул үҙендә нисек итеп бәхетлерәк һәм ҡайнап торған тормош менән йәшәү тураһындағы аҡылдың ҡартаймаҫ запасын туплаған.

37. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, кенә ҡыумау - күптәр үҙҙәрендә тәрбиәләй алмаған, шул уҡ ваҡытта ул күңел тыныслығын һаҡлау өсөн иң мөһим булған изгелек. Марк Твен, рәхимлелек - сәскәне тапап үткән табан аҫтында ҡалған миләүшәләрҙең нәзәкәтлеге, тип яҙған. Һәр ваҡыт, бигерәк тә был бик ауыр һәм ҡатмарлы тойолған хәл-торошта изге рәхимлелек күрһәтергә тырышығыҙ. Шулай итеп, һеҙ күңел китерлек ғәйепләүҙәргә, зәһәр киҫәтеүҙәргә һәм кәмһетеүҙәргә үҙегеҙҙе ҡағылырға, тыныс, бер нәмәгә тупланған көйләнешегеҙҙе боҙорға мөмкинлек бирмәйәсәкһегеҙ.

38. Үҙегеҙҙең кәсәгеҙҙе бушатығыҙ. Тулы һауытҡа һыу һалып булмай. Шуның кеүек, кеше лә, мин барыһын да беләм, тип уйлаһа, бик тиҙ деградацияғы биреләсәк һәм тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәрелә алмаясаҡ. Ышаныслы, өлгөрөп еткән шәхесте уның белем алыу өсөн яңы мөмкинлектәр эҙләүе ҡылыҡһырлай. Хатта уҡытыусыларҙың да уҡытыусыһы була.

**Робин ШАРМА.**



## 21 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 12.00**
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Ты не один". Сериал (16+)
16.20 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Виктория", 1-я и 2-я серии (16+)
23.30 Ночные новости
23.50 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (18+)
00.50 "Омен" (18+)
03.00 Новости
03.05 "Идиократия" (16+)

### РОССИЯ 1

